✓*Күптәр тормошто дөрөҫ ҡабул итмәүе арҡаһында үҙен бәхетһеҙ итеп тоя. Уларҙың бәхетһеҙлеге сәбәбе - башҡа кешеләрҙә йә уның нимәһелер юҡлығында түгел, ә тормошҡа ҡарата дөрөҫ булмаған мөнәсәбәтендә. "Минең ожмахым - минең йөрәгемдә" ти бер халыҡ мәҡәле. Шуның һымаҡ, кешенең бәхете - уның күңелендә, тик ул уны, яҡында ғына булған бәхетен, шәйләмәй. Эргәгеҙҙәге бәхетте күрергә өйрәнегеҙ.*

*Абдулла Карни.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11 - 17 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№2 (576)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ат аунаған ерҙә...**

төк ҡала



3

**Йәштәребеҙ...**

иғтибарҙан мәхрүм түгел



5

**Ушу тренеры һабаҡтары**



6

**Тарихтан мәҙәниәт кенә түгел...**



8-9 киләсәк тә башлана

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Гәзит-журналдарҙа баҫылған, телевидение, радионан яңғыраған ялған һүҙ нисек ҡабул ителә?

*Зәкирйән ӘМИНЕВ, философия фәндәре кандидаты, отставкалағы прокурор:* Халыҡ һәр заманда ла "ташҡа баҫылғанға" ихтирам һәм ышаныс менән ҡараны, уға һәр саҡ ҡолаҡ һалды. Был дөрөҫ тә ине, сөнки мәғлүмәт саралары һәр ваҡыт хәҡиҡәтте сағылдырырға тейеш, тип ышаныла ине бит. Ләкин һуңғы йылдарҙа киң мәғлүмәт сараларына ышаныс ҡаҡшай бара, сөнки цензураның булмауын бөгөн ҡайһы бер баҫмалар, нимә яҙһаҡ та ярай, тип аңлай башланы. Бының менән мин, цензура булдырырға кәрәк, тип әйтергә теләмәйем, цензура һәр журналистың күңелендә булырға тейеш. Батып барғанда һаламға йәбешкән төҫлө, күп баҫмалар - тираждарын тотор өсөн, ә электрон мәғлүмәт саралары иһә рейтинг хаҡына һәр төрлө "ҡыҙҙырылған" факттарҙа соҡсона башлай, онотолоп бөткән мәғлүмәттәрҙе килтереп сығарып, ажиотаж, йәмәғәтселектә ығы-зығы тыуҙырырға маташа, бер көстәрҙе икенселәренә ҡарата һөсләтә. Шунлыҡтан килеп сыға ла инде айырым кешеләргә ҡарата ғына түгел, ә тотош халыҡтарға ҡаршы мәғлүмәти һөжүм, ҡара яғыу, һәр төрлө уйҙырмалар. Бындай осраҡтарға ҡарата халҡыбыҙ аҡылы шулай ти: эт өрә торор, бүре йөрөй торор. Һәр бер сәңкелдәүгә иғтибар биреп, эт ыңғайына эт булмауың, өндәшмәй, шым ҡалыуың хәйерлерәк тә һымаҡ, бер уйлаһаң. Күп осраҡта беҙ шулай эшләйбеҙ ҙә, ләкин сабырлыҡтың да сиге бар. Демократияны, илдәренең төп Законы - Конституцияларын һанлаған, уға буйһонған сит илдәрҙә тотош халыҡтарға ғына түгел, бәлки айырым кешеләргә ҡарата ла саҡ ҡына яла яғыу, кәмһетеү мөмкин булмаған хәл, унда ғәҙел суд һәр кемде үҙ урынына ҡуя. Бәлки, беҙгә лә киң мәғлүмәт сараларында халҡыбыҙға, тарихыбыҙға, арҙаҡлы шәхестәребеҙгә ҡарата юл ҡуйылған бысраҡ уйҙырмаларға ҡарата суд аша көрәшергә кәрәктер? Мәҫәлән, үҙәк баҫмаларҙа ғына түгел, хатта үҙебеҙҙең ҡайһы бер республика баҫмаларында ла халҡыбыҙ тарихына яла яғыусылар сығышы баҫылып тора. Бындай осраҡта беҙ өндәшмәй ҡалырға тейеш түгелбеҙ. Халҡыбыҙ хоҡуҡтарын яҡлаусы, мәнфәғәттәребеҙҙе күҙәтеүсе булараҡ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ошо бурысты үҙ иңенә алып, киң ҡарашлы, төплө юрист штаты тәғәйенләп, яла, бысраҡ уйҙырмалар һәм башҡа ошондай проблемалар менән ныҡлап шөғөлләнә башлаһа, кеше һәм тотош халыҡ хоҡуҡтарын һанға һуҡмаусы бәғзе бер "хоҡуҡ һаҡсылары" ауыҙҙарын үлсәп асыр ине, бәлки, тигән өмөт йәшәй күңелдә. Сөнки һәр бер ағыуға ҡаршы уны зарарһыҙландырыусы сара бар һәм булырға тейеш тә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ХАЛЫҠ ҺЫНАМЫШТАРЫ*

# ЙЫЛҠЫ...

## ямғырҙан ҡаса

**Мин етмешенсе йылдар аҙаҡтарынан бирле һәр көндөң торошо тураһында яҙмалар алып барам: уларҙа һауа температураһының, һауа баҫымының һәм дымлылыҡтың күрһәткестәрен, башҡа төрлө ҡыҙыҡлы күренештәрҙе теркәп барырға тырышам. Был яҙмаларым киләһе йылдың нисегерәк килерен, ул йылда ниндәй һауа торошо өҫтөнлөк итерен алдан самаларға ярҙам итә.**

**(Дауамы 2-се биттә).**



*Ап-аҡ ҡар өҫтөндәге тауға урләгән эҙҙәр... яңы тормош башлаусыныҡы түгелме икән?..*

**✓ Минең үҙ ғүмеремдә күргән һәм теркәгән Йылҡы йылдарының үҙенсәлеге боронғолар әйткәне менән тап килә. Был йыл ҡойма ямғырлы ла, артыҡ ҡоро ла түгел - уртаса яуым-төшөмлө йыл.**



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҺАНДЫҠҺЫҘ КЕЙӘҮГӘ СЫҠМА



**Магнитогорск ҡалаһында йәшәйем, ҡаланың металлургия комбинатында эшләйем. Ғаиләм бар, улым үҫеп килә. Төп шөғөләмдән тыш, буш ваҡытымда һандыҡтар, йорт йыһаздары эшләйем.**

Өфөлә мебель фабрикаһында эшләгән саҡта йорт йыһаздары эшләүҙең бар нескәлектәренә төшөндөм. Һуңынан уларҙы үҙем эшләй башланым. Өйөмдәге бар мебелде үҙ ҡулым менән эшләп ҡуйҙым. Был финанс яҡтан да отошло, зауығыңа оҡшатып эшләйһең, һаҡлыҡ менән ҡулланаһың, ғөмүмән, бар яҡлап уңайлы. Бынан тыш, кешеләрҙән дә йорт йыһаздары эшләүгә күп заказдар ҡабул итәм. Магазиндарҙа мебель етерлек булһа ла, ҡулдан эшләнгәндәренә халыҡтың ихтыяжы ҙур.

Шулай уҡ бер нисә йыл элек һандыҡтар эшләй башланым. Бөгөнгө көндә күберәк ошо эш менән шөғөлләнәм. Әйберҙәремде ауылдарға алып барып һатам. Беҙҙең яҡта йола көслө булғас, һандыҡ һораусылар күп. Ҡыҙҙарҙы кейәүгә биргәндә үтәлә торған төп ғөрөф-ғәҙәттәрҙең береһе бит был. Килен һандыҡтарын төрлөсә биҙәп, һораусыларҙың теләгенә ярашлы нағышлап эшләйем. Халҡыбыҙҙың йолаһы һаҡланыуына үҙемсә булышлыҡ, ярҙам да итәм. Яҡын киләсәктә эштәремде Учалы районына алып барып күрһәтмәксемен. Ул яҡтарҙа кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарға яңы йортҡа үҙ һандығы менән күсеү йолаһы бөтөп бара, тиҙәр.

Ауыл-ҡалаларыбыҙҙа ҡул оҫталары булырға тейеш. Бөгөн магазиндарҙа күп нәмә һатып алырға була, төрлөлөк яғынан да ҡытлыҡ юҡ, күңелеңә яҡҡанын алаһың, оҡшамаһа - алыштыраһың. Ләкин үҙ ҡулдарың менән эшләгән йыһаздарҙың ҡиммәте бөтөнләй башҡа. Уларҙа халҡыбыҙҙың тарихы ла, булмышы ла, йолаһы ла сағыла. Икенсенән, һәр эшкә күңел бирелеп эшләнә, уларҙың сифаты яҡшы, шуға күрә лә етешһеҙлектәр булмай, тиерлек. Өсөнсөнән, бигерәк тә эшһеҙлек көслө булған ауылдарҙа үҙеңде, ғаиләңде ҡарарға яҡшы сара, килем сығанағы был. Оҫта икәнһең, исемең танылдымы, заказдарҙан ял булмаясаҡ. Дүртенсенән, ҡыйын булһа ла, күңелгә рәхәтлек биргән бик мауыҡтырғыс шөғөл ул. Әйҙәгеҙ, һөнәрмән булайыҡ!

**Вадим ЙӘҺҮҘИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Гәзит-журналдарҙа баҫылған, телевидение, радионан яңғыраған ялған һүҙ нисек ҡабул ителә?

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәнзил САНЪЯРОВ, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының ғилми хеҙмәткәре:*** Рәсәй матбуғатында цензура булмауы, ҡайһы бер журналистар тарафынан "һүҙ иреклеге" тигәнде үҙ кеҫәләрен тултырыу маҡсатында ҡулланыуы арҡаһында хатта олпат ҡына гәзиттәр биттәре лә, олпат ҡына телевидение каналдары ла туҙға яҙмаған алдаҡ менән сыбарлана йыш ҡына. Һуңғы ваҡытта, мәҫәлән, бер үҙәк баҫмала башҡорт халҡының тарихы, унын шәхестәре тураһында уйҙырма һәм сенсацияға ҡоролған хәбәрҙәр баҫылды. Күрәһең, был баҫма ла шундай алдыҡ һәм арзан сығыштар менән уҡыусылар йәлеп итеү юлына баҫмаҡсы булғандыр.

Ғөмүмән, ҡайһы бер намыҫһыҙ әҙәмдәрҙең гәзиттәрҙе, телевидениены пиар, реклама итеп файҙаланыуы киң тарала башланы. Ундайҙар төрлө һайлауҙар алдынан бигерәк тә ныҡ әүҙемләшә. Билдәле бер маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн махсус ойошторолған материалдар хатта үҙебеҙҙең республика мәғлүмәт сараларында ла күренгеләп ҡала. Башҡортостан юлдаш телеканалындағы "Дознание" программаһының һуңғы бер сығарылышы күптәрҙе аптыратҡандыр, тип уйлайым. Аптыратты, сөнки Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың, Торатауға теймәйәсәкбеҙ, тип әйткән һүҙҙәрен инҡар итеү булып ҡабул ителде ул тапшырыу. Етмәһә, унда бик күп уйҙырмаларға юл ҡуйылды. Торатауҙы сеймал итеп файҙаланыу ябай халыҡ мәнфәғәтенән сығып эшләнә, тип ышандырырға тырышты автор. Аҙ ғына аңы бар кеше лә ышанмаҫ быға, сөнки капиталистик предприятие фәҡәт аҙ сығымдар менән мул табыш төшөрөүҙе генә ҡайғырта, ябай халыҡ ҡайғыһы - төштән һуң уға. Шуға ла киң мәғлүмәт саралары аша яңғыраған һәр һүҙҙе, һәр юлды уйланып, аҡыл-аң аша "һөҙөп" ҡабул итеү, аҡты ҡаранан айыра белеү, белем даирәһе, мәғлүмәтле булыу кәрәк бөгөнгө уҡыусыларға.

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы "Көнгәк" гәзите баш мөхәррире:*** Илебеҙҙә һәр идеология осоронда бер сиктән икенсе сиккә һуғылыуға күнегеп тә киләбеҙ кеүек. Бөтә Союз удар төҙөлөштәр осоронда барлыҡҡа килгән предприятиелар "удар" рәүештә емерелә, йәнәһе, капитализмға бындай ҙур завод-фабрикалар кәрәкмәй. Шуға ла элек улар етештергән тауарҙарҙы хәҙер Ҡытайҙың сифатһыҙ продукцияһы алыштыра. Бына ошондай уҡ параллелде матбуғат саралары материалдарына ла үткәрергә мөмкин. Илебеҙҙә һүҙ азатлығы юҡ, тип, нисәмә йылдар лаф оролдо. Тырыша торғас, уға өлгәштеләр, ләкин һүҙ азатлығы асылда нимә икәнен берәү ҙә аңламаған кеүек.

Бөгөн ҡайһы бер гәзит биттәрендә, телеканалдарҙа ил Президентын да, депутатарҙы ла һүгәләр, әрләйҙәр, йәнәһе, күрегеҙ, ана ниндәй һүҙ азатлығы беҙҙә! Интернет сайттарына инһәң, ниндәй генә мәсхәрә сығыштар осратмайһың. Ә Үҙәк телевидение каналдары танылған артистар, йырсыларҙың шәхси тормошон күрһәтеүҙән, "түшәк-яҫтыҡтарында" соҡсоноуҙан бушамай, әйтерһең, көндәлек тормошта башҡа әһәмиәтлерәк проблема юҡ.

Шәхси баҫмалар, шәхси телеканалдар, ярай инде, аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәр өсөн "йәшел урам" асып көн күрә. Ә бына һалым түләүселәр иҫәбенә йәшәгән гәзиттәр һәм телеканалдарҙың бындай юлға баҫыуы менән бер ҙә килешеп булмай. Яңы йыл алдынан беҙҙең Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы "Дознание" тапшырыуының бер сығарылышы, мәҫәлән, бар халыҡта аптырау тыуҙырҙы. Халҡыбыҙ өсөн иң изгеләрҙән һаналған Торатау тиклем Торатауҙы емереү, сеймал итеү зарурлығын төрлө яһалма мәғлүмәттәр аша иҫбат итеп маташты унын авторы. Был тапшырыу Башҡортостан юлдаш телеканалыныҡы түгел, ә авторлыҡ эше, тигән яуап алды шылтыратыусылар телеканал етәкселегенән. Эфир ваҡыты биргәс-биргәс, автор тапшырыуҙары мөхәррирләнергә тейеш түгелме икән ни? Аптырата был хәл.

Һүҙ азатлығына яуаплылыҡ төшөнсәһен дә йәбештермәй тороп, беҙҙә бер ниндәй тәртип тә, мәҙәнилек тә булмаясаҡ, минеңсә. Бөгөн беҙгә, тәү сиратта, ошолар өҫтөндә эшләргә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ХАЛЫҠ ҺЫНАМЫШТАРЫ

# ЙЫЛҠЫ...

## ямғырҙан ҡаса

**(Башы 1-се биттә).**

1974, 1986, 1998 йылдар - ҡытай календары буйынса Барыҫ йылы - бүтән йылдарҙан мул уңышы менән айырылып торҙо. "Барыҫ йылы барын сәс, йә булмаһа, тары сәс", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер, тип уйлайым. Халҡыбыҙ һәр йылға исем биргән хайуан һыҙаттары буйынса ҡылыҡһырлама биреп, килер йылға үҙенсә әҙер булырға тырышҡан, төрлө мәҡәл-әйтемдәр, шул иҫәптән һынамыштар ярҙамында был белемде киләһе быуынға еткергән.

Йылҡы йылы тураһында ата-бабалар: йылҡы малы ямғыр яратмай - тегендә-бында сабып, елеп утлауҙы үҙ итә, тигән. Ысынлап та, минең үҙ ғүмеремдә күргән һәм теркәгән Йылҡы йылдарының үҙенсәлеге боронғолар әйткәне менән тап килә. Был йыл ҡойма ямғырлы ла, артыҡ ҡоро ла түгел - уртаса яуым-төшөмлө йыл. 1978, 1990, 2002 йылдарҙа ауыл хужалығында мул уңышҡа өлгәшелмәгән, уңыш уртаса булған. Хәтерегеҙҙә булһа, 1986 әлеге лә баяғы Барыҫ (тигр) йылында республикала 5 миллионға яҡын тонна иген урып-һуғып алыуға өлгәшкәйнеләр. Шундай уҡ уңышлы йыл булды тип, 1998 йылды ла билдәләргә була. Сағыштырыу өсөн: үтеп киткән 2013 йылда ла уңыш арыу ғына булды.

Йылҡы йылы ауыл хужалығы культуралары өсөн уңышлы булыр. Көҙөн - мул ямғыр, ҡышын ҡар яуҙы, ҡар әле лә яуа - беҙҙең яҡтарҙа көрт ҡалын ғына. Шулай булғас, ужым культуралары, үләндәр һәйбәт сығасаҡ, тигән һүҙ. Быйыл ямғырҙар яуып торҙо ла, ер саҡ ҡына туңдырғас, ҡар ятты. Был йылдың уңышлы киләсәгенең бер күрһәткесе. Быйылғы көҙ, ер эшкәртеү йәһәтенән ҡарағанда, бик ҡулайлы күренә һәм ул киләһе уңыштың мул булырына ишаралай.

Беҙҙең яҡтарҙа яуым-төшөм һәр саҡ наҡыҫыраҡ инде ул: яҙ башынан үҙ ваҡытында сәсеп, орлоҡто тамырландырып өлгөрмәнеңме - эштәр хөрт, тиһәң дә була. Шуға, агроном сағымда егеттәргә: "Ямғыр яуып торһа ла, сәсеүгә сығығыҙ", - тип әйтә килдем. Йыл нисек килер икән, тип мөрәжәғәт итһәләр, мин йыш ҡына: "Йүнләп сәсмәһәң, йыл ниндәй генә һәйбәт килмәһен, яҡшы уңыш алып булмай", - тим хәҙер ҙә.

Беҙҙең яҡтарҙа һуңғы 20-30 йылда ер аҫты һыуҙары менән өҫкө тупраҡ һыуҙары тоташҡаны юҡ. Шулай булғас, ерҙе соҡоғанда, май айында ҡаҙһаң да, ер өҫтөндә дым ята, бер аҙҙан һуң ер ҡоро икәнлеге күренә. "Ямғыр яуһа ла, ер ҡопҡоро бит", тибеҙ бындай саҡта. Алдағы йылда ямғыр һыуы ер аҫты һыуҙарына тиклем барып етерме, юҡмы? Шул да борсой әле мине.

**ШУЛАЙ ҘА...**

**Йыл ниндәй булһа ла, мин үҙем баҡсамда гел йәшелсә-емеш үҫтереп алам: мин ултырҡан йөҙөм ҡыуағы ла йыл һайын емешен бирә. Ейәндәр килеп, йөҙөмөн, алмаһын, еләк-емешен, башҡаһын өҙөп ашап йөрөһә лә, тип, баҡса мәшәҡәттәренә күмелеп, саф һауала эшләп ваҡыт үткәрәбеҙ ҡатыным менән. Шуның менән бәхетлебеҙ һәм тормоштан ҡәнәғәтбеҙ.**

**Зиннур КҮСӘРБАЕВ,**
**хаҡлы ялдағы агроном.**
**Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2014 йыл Рәсәй Федерацияһында Рәсәй - ЕС Фән йылы үтәсәк. Был тураһағы указға РФ Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйҙы. Дәүләт башлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, саралар Рәсәй Федерацияһының фәнни-техник ҡеүәтен үҫтереүгә һәм Европа союзы илдәре менән оҙайлы ваҡытҡа партнерлыҡты киңәйтеүгә йүнәлтеләсәк.

✓Францияла халыҡ-ара шашка буйынса үҫмерҙәр араһында донъя чемпионаты тамамланды. Классик һәм "йәшен тиҙлегендәге" программаларҙа Рәсәй ҡыҙҙары уңышҡа өлгәште. Аяника Кычкина ике миҙал яуланы: блицта "бронза" һәм классикала "көмөш". Өфөнөң 23-сө Балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Айгөл Иҙрисова "классика"ла еңде.

✓Ошо көндәрҙә Сибайҙа етем балаларға фатир асҡыстары тапшырыу тантанаһы үтте. Ҡаланың Көнсығыш биҫтәһендәге үҙенең архитектура һәм төҫтәр гаммаһы менән айырылып торған 55 фатирлыҡ йортто "Оптима-С" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙөп өлгөрттө. Сибайҙа йәшәүсе ата-әсәһенән мәхрүм ҡалған 35 йәш кеше торлаҡ алыу бәхетенә эйә булды. Сибайҙа Фонд төҙөгән был өсөнсө социаль йорт. 2012 йылда ике йорт файҙаланыуға тапшырылғайны. Яңы йылдың ғинуарында 35 фатирлыҡ яңы йортҡа нигеҙ һалынасаҡ.

✓Өфөлә "Социаль такси" хеҙмәте эшләй башланы. Унын хеҙмәтенән инвалидтар, өлкән кешеләр файҙалана ала. Ҡала буйлап махсус уңайлыҡтар менән йыһазландырылған өс "Газель" машинаһы йөрөйәсәк. Юл хаҡы ғәҙәттәге таксиға ҡарағанда 30-40 процентҡа арзаныраҡ. 267-54-77 телефоны буйынса тулыраҡ мәғлүмәт ала алаһығыҙ.

✓Канадала Халыҡ-ара Саңғы уҙыштары һәм биатлон буйынса паралимпия комитеты донъя Кубогының сираттағы этабында Башҡортостан спортсылары айырылып торҙо. Был стартта донъяның 12 иленән инвалид булған 100-ләп спортсы ҡатнашты, шуларҙан 42 спортсы Рәсәйҙән килгәйне. "Сочи 2014" илсеһе Ирек Зарипов ике алтын, бер көмөш һәм бер бронза миҙалдар яуланы. "Сочи 2014" чемпионы" проектында ҡатнашыусы Кирилл Михайлов ике бронза награда алды.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АТ АУНАҒАН ЕРҘӘ...

## төк ҡала

**Йылҡы йылын, бисмиллалап, ат хаҡындағы әйтемдәр тураһында һөйләшеүҙән башлайыҡ әле. Ат аунаған ерҙә төк ҡала инде ул. Әйтәйек, утһыҙ төтөн сыҡмаған кеүек. Уның ниммәһе бар тағы? Ат аунауҙан - төк, ут яныуҙан - төтөн. Сәбәп - һөҙөмтә. Мәғәнә һәлмәклеге һәм оҡшашлығы буйынса был ике әйтемде бер-береһенең варианты, игеҙәге тип әйтергә лә була. Уларҙың "Утһыҙ төтөн сыҡмай" тигәненә килгәндә, кемдер берәү махсус төтәткестәр эшмәкәрлегендә төтөн сыҡһын өсөн ялҡындың мотлаҡ булыуы шарт түгел, тип тә әйтер. Кем белә, бәлки, киреһенсә, төтөнһөҙ ут булмайҙыр? Ә? Тағы ла киң билдәле "Иң тәүҙә йомортҡа булғанмы, әллә тауыҡмы?" тигән дилемма алдына килеп баҫабыҙ. Ғәҙәттә, логиканың ошондай дилемма аталмыш юл сатына килеп сыҡҡанда әңгәмә-бәхәстәр оҙон-оҙаҡҡа һуҙылыусан. Шул саҡта кемдер әйтеп ҡуйыр: һе, тауыҡ бит үҙе лә ҡасандыр йомортҡа эсендә ятҡан.**



Үҙ ғүмерендә һис юғы бер тапҡыр усаҡ тоҡандырып ҡараған кеше шуны ла белмәй ҡалмағандыр: төтөн, ғәҙәттә, усаҡты тоҡандырған саҡта һәм усаҡ янып бөткәс, торонбаштар ҡуҙланып ләүкегәндә сыға башлай. Ошо ябай ғына күренештән ниндәй фәлсәфәүи һығымта яһарға була, тип уйлайһығыҙ? Эйе, төтөн дә, ут та бер үк ваҡытта сәбәп тә, һөҙөмтә лә булыуы бар бит. Мәсьәләгә ҡайһы яҡтан ҡараһаң, бер яғында ут беренсел, икенсеһендә төтөн усаҡтың айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелә лә ҡуя. Ә инде "ат аунау" менән "төк ҡалыу" миҫалына килгәндә, төк ҡалыуҙы ат аунауға бер нисек тә сәбәп итеп ҡуйып булмаған кеүек. Әммә был тәү ҡараштан ғына шулай тойола. Хәҙер мәсьәләгә кире яҡтан ҡарайыҡ та, шаҡ ҡатайыҡ: һе, була икән дә! Йәғни, ерҙә төгө ятып ҡалһын өсөн дә аттың аунауы фарыз бит әле. Был осраҡта, күреп тораһығыҙ, төк ҡалыуы сәбәпкә, ат аунауы һөҙөмтәгә әүерелә лә китә. Ҡыҙыҡ был логика фәне тигәндәре. Заман хатта логикаһыҙ ҙа ҡайһы бер әйтем-мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен баштүбән әйләндерә.

Шундай уҡ юл менән "Ат аунаған ерҙә төк ҡала" әйтеменең башҡа варианттарын тикшереп ҡарайыҡ. Варианттарға килгәндә инде, улар бихисап. Әйтәйек, "Хикмәт бар ерҙә михнәт бар", "Шатлыҡ килмәй, ҡайғы китмәй", "Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнысҡы төшә", "Сәбәпһеҙ ҡош осмаҫ", "Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" һ.б.

- "Хикмәт бар ерҙә михнәт бар" - бында михнәт булһын өсөн дә хикмәтте күреү, татыу тәүшарт. Әгәр ҙә ошо шарт үтәлмәһә, йәғни михнәт булмаһа, хикмәт тә үҙ әһәмиәтен юғалта;

- "Шатлыҡ килмәй, ҡайғы китмәй" - бында шатлыҡтың килеүе ҡайғының китеүенә шарт булған кеүек, ҡайғы китеү маҡсаты ла шатлыҡтың килеүен талап итә;

- "Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнысҡы төшә" - бында ат аунаған ерҙә төк ҡалған кеүек принцип, йәғни юнысҡы төшһөн өсөн дә утын киҫелергә тейешле;

- "Сәбәпһеҙ ҡош осмаҫ"-гәзиттең быйылғы 26-сы һанында был әйтемдең мәғәнәһен аңлатҡанда ҡош осоу сәбәптәрен төрлө яҡтан тикшерҙек. Кәрәкле тапһағыҙ, аңлатманы шунан табырһығыҙ;

- "Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" - берәү көн күреүҙе маҡсат итеп йәшәй-йәшәй, әммә мандый алмай ҙа, шул саҡ икенсе берәүҙең үлеме уға көн күрергә шарт тыуҙыра, йәғни ул үлгән кешенең урынын, биләгән вазифаһын яулай.

Ҡыҙыҡ ҡына бер риүәйәт. Бер саҡ аҡһаҡал Чжуан-цзының йортона арыуынан бигерәк күңеле урынында булмауынан яфаланған, әлһерәгән, самаһыҙ ябыҡҡан кеше килеп ингән. Йорт хужаһы уның йөҙөнә, төҫөнә, өҫ-башына, һын-һыпатына ҡарап, шундуҡ тегенең кемлеген, ниндәйерәк ғазаптар кисереп йөрөүен тоҫмаллаған.

- Күпме йәшәп, донъяла һинең кеүек балтаһы һыуға төшкән кешене күргәнем юҡ ине әле, - тип ҡаршылаған ул йортоноң тупһаһын аша атлап инеүсене.

Үҙен бер күреүҙән аңлап, күңел торошон тоҫмаллап хәленә инеүсене оҙаҡ эҙләгәндән һуң тапҡандай ҡыуанған мосафир еңел булмаған яҙмышы хаҡында зарланып һөйләргә тотонған.

- Күңелем менән тормош араһында гармония эҙләп, ун ике йыл буйына ер йөҙө буйлап ҡыҙырҙым: донъялағы барлыҡ тауҙарҙың барлыҡ түбәләренә лә артылдым, Елдәр далаларында япа-яңғыҙым дәрүишлек ҡылдым, күп һанлы аҡыл эйәләре менән осрашып һөйләштем. Тик барыһы ла бушҡа ғына булды. Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, кем менән генә осрашһам да, күңел тыныслығы, тойғолар сафлығы, уйҙар аҡлығы таба алманым. Остазым, әйтегеҙсе миңә, рухи таҙарыныу юлдарын һәм ысулдарын эҙләү тигән төшөнсә ялғанмы ни? Юҡмы ни был донъяла изгелек, сафлыҡ, аҡлыҡ тигәндәре? Әллә улар һеҙҙең кеүек аҡыл эйәләренең телендә, хыялында ғына йәшәйме? Һеҙ мин төбәп килгән һуңғы аҡһаҡал, һеҙҙе остаздарҙың остазы тип ишеткәйнем.

Чжуан-цзы мосафирҙы иғтибар менән тыңлап ултырған да, бер бармағын күккә төбәп, байтаҡ ҡына өндәшмәй торғас:

- Күреп торам, улым, һин һәр ваҡыт юлдаһың. Алдыңа алған маҡсатыңа барып етмәйенсә, туҡталып ҡалмайһың икән, - тип һүҙ башлаған остаз. -Шулай булғас, мин һиңә бығаса берәүгә лә әйтмәгән серемде асам. Әгәр ҙә һин ут эҙләйһең икән, уны бары тик төтөнө менән бергә генә таба аласаҡһың. Ат аунаған ерҙә мотлаҡ рәүештә төк ҡала. Ут менән төтөн, ат менән төк - бер-береһенән айырылғыһыҙ. Әгәр ҙә йылғала сағылған айҙы мәңлелеккә айырылғыһыҙ итеп үҙеңдеке иткең килһә, һәр ваҡыт үҙең менән бер биҙрә һыу йөрөтөргә бурыслыһың. Кәрәк саҡта биҙрәң эсендәге һыуға күҙ һалып ҡына ебәрһәң дә, ундағы айҙың артынан эйәреп йөрөүеңә инанаһың һәм юлыңды дауам итәһең. Шунһыҙ, йылғалағы ай һинеке булмаясаҡ. Тап шуның кеүек, кешенең теләгенә һәр ваҡыт ҡаршылыҡтар осрай. Һинең сафлыҡҡа, изгелеккә ынтылышың, уларға өлгәшеү теләгең ни тиклем көслөрәк булһа, һиңә ҡаршылыҡтар ҙа, мәшәҡәттәр ҙә шул тиклем көслөрәк мәшәҡәтләйәсәк, күберәк тап буласаҡ һәм артабан атларға ҡамасаулаясаҡ, аяғыңа тышау булып һалынасаҡ. Әгәр ҙә һин яҡшылыҡ менән яуызлыҡты, лайыҡлы менән лайыҡһыҙҙы, аҡ менән ҡараны яҡшы айыра белһәң, ул сағында яуызлыҡ, лайыҡһыҙ һәм ҡара төҫ йәйләп-йәйләп һиңә буйһона башлаясаҡ. Аҡты ҡаранан айыра белеүең һиңә үҙ-үҙең менән идара итеү мөмкинлеге, үҙ-үҙең өҫтөнән хакимлыҡ итә белеү һәләтен бүләк итәсәк. Дошманыңдың күҙенә тура ҡараған саҡта ғына ул үҙенең көсөн юғалта...

Был риүәйәткә һалынған фекер "Ат аунаған ерҙә төк ҡала", "Утһыҙ төтөн сыҡмай" әйтемдәренең мәғәнәһен тағы ла киңерәк итеп асып күрһәтә. Остаздың бигерәк тә "Һинең сафлыҡҡа, изгелеккә ынтылышың, уларға өлгәшеү теләгең ни тиклем көслөрәк булһа, һиңә ҡаршылыҡтар ҙа, мәшәҡәттәр ҙә шул тиклем көслөрәк мәшәҡәтләйәсәк..." тигән һүҙҙәре беҙҙең милли тормошобоҙҙағы бер үҙенсәлекте аңлата ла бирә. Әгәр ҙә сафлыҡҡа, изгелеккә ынтылмаһаҡ, матди байлыҡ ҡына туплауҙы маҡсат итеп ҡуйһаҡ, йәшәүе лә еңелерәк булыр ине. Ат аунаған ерҙә төк ҡала инде ул...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ РФ Социаль страховка фондының Башҡортостан бүлексәһе идараһыһы Марат Латипов эш урынында сәләмәтлеген юғалтҡан 15 кешегә машина асҡыстары тапшырҙы. 2001 йылдан алып производствола имгәнгән 852 кешегә тапшырылған бындай ҡул менән идара ителеүсе автомобилдәр.

✓ 2014 йылда инвалидтарҙы эшкә урынлаштырыу өсөн ике процент квота хеҙмәткәрҙәр һаны 35 кешенән артығыраҡ булған коллективтарға билдәләнә, тип хәбәр итте хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Лена Иванова. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда 2010 йылдан алып йыһазландырылған эш урындарына 780 инвалид эшкә урынлашҡан, уларҙың 554-е эшләүен дауам итә. Һуңғы ике йылда инвалидтар өсөн тағы ла 572 эш урыны булдырыу планлаштырыла. Инвалид өсөн эш урынын йыһазландырыуға эш биреүсегә уртаса 66,2 мең һум күләмендә субсидия бирелә.

✓ Башҡортостан Республикаһы Федераль почта элемтәһе идаралығы директоры Ирек Ғәлимов әйтеүенсә, яңы бүлексәләр асыу сираттарҙы кәметергә һәм почта объекттарына эште тигеҙ бүлергә булышлыҡ итәсәк. Йыл башында уҡ Рәсәй Почтаһы Ҡандрала үҙ көстәре менән төҙөлгән бүлексәне асасаҡ. Шулай уҡ Башҡортостанда реконструкциялағандан һуң ете элемтә бүлексәһе асыу планлаштырыла, уларҙың икәүһе Өфөлә урынлашасаҡ. Бынан тыш, баш ҡаланың эшләгән бүлексәләре базаһында өҫтәмә рәүештә оҙайтылған эш графигы менән ике посылкалар биреү үҙәге асыласаҡ.

✓ Башҡорт дәүләт педагогия университеты мәктәптә һәм вуздарҙа уҡытыусыларҙы хәҙерге заман Өфө әҙәбиәтен уҡытыуға әҙерләү буйынса масштаблы кампания башланы. Был эштең "нигеҙе" сифатында БДПУ-ның рус әҙәбиәте тарихы кафедраһы октябрҙә дүрт йөҙ битлек "Современная уфимская художественная проза (1992-2012)" исемле хрестоматия сығарҙы. Ноябрҙә һәм декабрҙә педагогия университеты Өфө һәм Башҡортостан районлары уҡытыусылары өсөн "Современная уфимская русскоязычная художественная проза" электив курсын тормошҡа ашырыуҙың методик аспекттарына арналған ике семинар үткәрҙе.

**"Башинформ"дан.**

ӘЙҘӘ, ҺӨНӘРЛЕ БУЛАЙЫҠ!

# АУЫЛДАН ҠАЛАҒА КИЛЕП...

**Интернетта таралған мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, донъяла 40 меңдән ашыу һөнәр иҫәпләнә. Был һандың дөрөҫлөккә яҡынмы, алыҫмы икәнлеген аныҡ ҡына әйтеүе ауыр, шуға ла бары тик "күп" тигән сифат менән генә хушһынып торайыҡ. "Күп" профессиялар араһынан үҙеңә генә оҡшағанын нисек һайлап алырға? Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш районадарының береһендә тыуып үҫкән, бөгөн баш ҡалала үҙ эшен асҡан Руслан Исхаҡов (әңгәмәсебеҙҙең һорауы буйынса иcеме үҙгәртелде) менән ошо темаға фекер алыштыҡ. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**

Башланғыс синыфтарҙа уҡығанда Арыҫлан исемле дуҫым иретеп йәбештереү серҙәре менән таныштырҙы. Ошо көндән алып минең тормошома паяльник, ҡурғаш, канифоль, транзистор, микросхема, лампочка кеүек һүҙҙәр килеп инде. Ҡыҙҙырыуҙан теремек тамсыға әйләнгән ҡурғаш ярҙамында тимер сымдарҙы бер-берең тоташтырыуҙан башланған ҡыҙыҡһыныуым яйлап хоббиға әүерелде. Таныш малайҙар тышта туп типкән, йылғала һыу ингән, урам ҡыҙырған ваҡытта мин электроника менән бәйле әҙәбиәт уҡыным, ҡурғаш иретеп-йәбештерҙем, өйҙәге боҙоҡ магнитофонды, радионы йүнәттем. Оҙаҡламай ауылдаштарым боҙоҡ аудио-видео-телеаппаратураһын миңә килтереп йүнәттерә лә башланы. Был ҡарурман-электрониканың төп ҡанундарын аңлап алғас, әллә ни ҡыйын да түгел икән, тигән һығымтаға килдем.

Тиҙҙән мәктәпте тамамлап, Өфөгә сығып киттем. Баш ҡалаға килгәндә минең кесәлә елдәр уйнай ине. Шуға өйрәнгән шөғөлөм - аудио-видео техника, компьютер йүнәтеү менән аҡса эшләргә булып киттем.

Әйтергә кәрәк, мин эш башларға теләгән был өлкәлә конкурентлыҡ көслө ине. Шуға тәүҙә интернеттағы бер нисә иғлан сайтына түңдәрен иғландар ебәрә башланым. Ниңә тәндәрен? Сөнки көндөҙ ебәрһән, иғланды күп кеше уҡырына ышаныс юҡ, төнөн ебәреп ҡуйһаң, иртәнсәк бөтөн сайттарҙа ла һинең иғландарың торасағын аңлай инем. Хәйләкәр ысулым бик файҙалы булып сыҡты - бер-бер артлы шылтыратыуҙар килә башланы. Шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлдем дә, көнөнә 5-10 адресҡа барып, телевизор, компьютер һәм башҡа техника йүнәтә, эшем өсөн ярайһы уҡ яҡшы ғына килем ала башланым. Бынан тыш, мин табып биргән заказдарҙы теүәл, сифатлы итеп үтәгән тағы бер нисә егетте эшкә ялланым. Бизнесыбыҙ сәскә атты. Яйлап, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында ла үҙ кешеләребеҙ барлыҡҡа килде. Интернет мөмкинлектәрен уңышлы файҙаланыу арҡаһында ошондай яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәштек.

Бөгөнгө көндә эшләйем, тиһәң - мөмкинлектәр ҙә, яулайым, тиһәң, бейеклектәр ҙә етерлек, бары һаулығың һәм яратҡан һөнәрең генә булһын, ҡалғанын табырға булалыр, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Руслан Исхаҡов бер һөйләшеүҙә: "Өр-яңы машина алдым әле, хәҙер фатир тураһында уйлай башланым", - тигәйне. Тимәк, эштәре уң бара, тип уйлап ҡуйҙыҡ. Бөгөн күптәр төрлө алдыҡ, дөрөҫ булмаған юлдар ярҙамында аҡса эшләргә тырыша. Руслан һымаҡтар иһә законлы юл менән аҡса таба.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УРМАНДАРҘА ЙӘНЛЕК КҮПМЕ?



**1 ғинуарҙан ҡырағай йәнлектәр һәм ҡоштарҙы иҫәпләүсе ҡышҡы маршрут башланды. Маршруттарҙың дөйөм оҙонлоғо 22 мең километрҙан ашыу һәм был сара 28 февралгә тиклем дауам итәсәк.**

Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Рәсәйҙә был сара 1964 йылдан бирле үткәрелә һәм ул һунар итергә яраған 18 төрҙән ашыу йәнлектең иҫәбен билдәләргә мөмкинлек бирә. Белгестәр ҡоштарға визуаль теркәү үткәрә, шулай уҡ йәнлектәрҙең ҡарҙағы эҙҙәрен иҫәпләп, уларҙың тәүлектең ҡайһы ваҡытында әүҙемерәк икәнен билдәләй.

Был ҡышҡы маршрут йәнлектәр донъяһы ресурстарын һаҡлау һәм контролдә тотоу, ҡыр йәнлектәренең популяцияһы һәм үҫеш динамикаһын тикшереү өсөн ҡулайлы. Тап ошо мәғлүмәттәр буйынса һәр һунар миҙгеленә дөйөм лимит ҡуйыла ла инде.

Белгестәр билдәләүенсә, республикала бөтә төр йәнлектәрҙең дә иҫәбе тотороҡло һаҡланып килә. Әлеге мәлдә "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгән маралдарҙың һаны бер аҙ артҡан. Был йәнлектәр Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән һәм Йылайыр райондарында ғына осрай. Ҡышҡы маршруттың һөҙөмтәләре апрель айында билдәле буласаҡ.

# ФАТИР ХАҠЫ АРЗАН ТҮГЕЛ



**Өфөнөң икенсел торлаҡ баҙарында бер квадрат метрҙың хаҡы үткән йыл аҙағында 61,5 мең һум тәшкил итте. "Эксперт" агентлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, йыл дауамында был сегментта хаҡтар 4 процентҡа артҡан.**

Иң ҡиммәтлеһе булып һаман да бер бүлмәле фатирҙар иҫәпләнә - квадраты 63,7 мең һум. Йылдың һуңғы айында был өлкәлә хаҡтар 1 процентҡа күтәрелгән. Ике бүлмәле фатирҙарҙы 60,3 мең һум менән тәҡдим итәләр. Өс бүлмәле фатирҙың квадраты 59,4 мең һум, күп бүлмәләләренеке - 62,2 мең һум.

Торлаҡҡа хаҡтарҙы билдәләгәндә уның ҡайһы районда урынлашыуы ла ҙур роль уйнай. Ҡаланың үҙәгендә иң юғары хаҡтар - квадратына 71,5 мең һум. Йәшел сауҡалыҡта - 66,5, Октябрь проспектында - 64,9, Һупайлыла - 63,9, Черниковкала - 55,2, Димдә - 53,3, Затонда - 50,3, Шаҡшала 44 мең һум. Өфөлә төҙөлгән торлаҡтың һәр квадраты - 55,2 мең һум. Йыл башынан хаҡтар 14,2 процентҡа күтәрелгән, белгестәр әйтеүенсә, был сегментта хаҡтар икенсел торлаҡ баҙарына ҡарағанда өс тапҡырға тиҙерәк үҫешә.

Торлаҡҡа иң түбән хаҡ Затонда билдәләнгән - 33 мең һум. Иң ҡиммәтлеһе - Мостай Кәрим һәм Октябрь революцияһы урамдарында - 79 мең һум. Һатыуға ҡуйылған фатирҙарҙың майҙаны 29,7 квадрат метрҙан 165 квадрат метрға тиклем. Яңы төҙөлөп ятҡан йорттарҙа бер бүлмәле фатирҙың хаҡы квадрат метрына уртаса 57,8 мең һум, ике бүлмәлеһе - 52,5 мең һум, өс бүлмәлеһе - 51,1 мең һум, күп бүлмәлеһе 67 мең һум.

Иң ҡыйбат төҙөлөш үҙәктә - квадрат метры өсөн 62,7 мең һумдан алып. Исемлекте артабан Октябрь проспекты (61,1), Йәшел сауҡалыҡ (59,3), Һупайлы (57), Черниковка (52,3) дауам итә. Үҙәктән алыҫ урынлашҡан райондарҙа бер квадрат метр торлаҡтың уртаса хаҡы 50 мең һум.

# ЙӘШЕ ЕТЕП... ӨЙЛӘНЕШӘЛӘР



**Башҡортостанда былтырғы йылдың 11 айында 33054 никах теркәлгән, был 2012 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда бер мең ярымға күберәк. Был мәғлүмәттәр тураһында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына Башҡортостан Республикаһының Граждандарлыҡ хәле акттарын теркәү идаралығы начальнигы урынбаҫары Алһыу Фәттәхова хәбәр итте.**

Бынан тыш, республикала балиғ булмаған өйләнешеүселәр һаны кәмеү һәм ғаилә ҡоророға теләүселәрҙең йәше артыу тенденцияһы күҙәтелә. Былтыр кәләштәрҙең уртаса йәше - 25-30, ә кейәүҙәрҙең 28-34 йәш тәшкил итте. Уҙған йылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙың уртаса йәше - 18-24, ә ир-егеттәрҙең 25-34 йәш тәшкил итә ине.

Былтыр ҡабаттан никахҡа инеүселәр һаны артыуы, шулай уҡ күпселек кәләштәр ирҙәренең фамилияларын алыуҙан баш тартыуы менән айырылып торҙо.

# ИҪӘБЕБЕҘ КИТАПҠА ТЕРКӘЛДЕ

**"2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Башҡортостан Республикаһы халҡы" статистика йыйынтығы донъя күрҙе.**

Унда һуңғы иҫәп алыу кампанияһының төп һөҙөмтәләре, шул иҫәптән республикала даими йәшәүсе халыҡтың иҫәбе һәм урынлашыуы, йәше, енесе, ғаилә хәле, белем кимәле, ҡайһы милләткә ҡарауы һәм ниндәй телдәр белеүе тураһында, иҡтисади әүҙемлеге һәм йәшәү сығанаҡтары буйынса мәғлүмәттәр баҫылған. Йыйынтыҡта шулай уҡ йорт хужалыҡтарының иҫәбе һәм составы, халыҡтың торлаҡ шарттары, даими йәшәү урынында күпме ваҡыт йәшәүе, балалар һаны тураһында мәғлүмәттәр бар.

"Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу-2010" кампанияһының тулы аналитик материалдары туғыҙ том тәшкил итә. Һәр кем уның менән Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 17 адресы буйынса Башҡортостанстатта таныша ала. Унда шулай уҡ республика халҡы тураһында статистиктарҙың йыйылма хеҙмәтен һатып алырға ла мөмкин.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә ике элемтә бүлексәһе асылды - Сипайловола Баязит Бикбай урамы, 17-се йорт һәм Димдә Генерал Күсимов урамы, 15/1 йорт адрестары буйынса. Был турала Башҡортостан Республикаһы Федераль почта элемтәһе идаралығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Дим һәм Сипайлово почта хеҙмәтләндереүҙәре менән тәьмин итеү яғынан Өфөнөң иң проблемалы микрорайондары булып тора. Сипайловола дүрт көн элемтә бүлексәһе эшләй, ә Димдә - өсәү.

✓Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау буйынса дәүләт корпорацияһы - Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фонды средстволары ҡатнашлығында 2013 йылғы адресы программаға ярашлы, 2013 йылда 51 күп фатирлы йорт (дөйөм майҙаны 220 мең квадрат метр) капиталь ремонтланды, 7 мең 887 кешенең йәшәү шарттары яҡшыртылды. Адресы программаны тормошҡа ашырыуҙа алты ҡала ҡатнашты: Өфө, Дүртөйлө, Күмертау, Октябрьский, Туймазы һәм Стәрлетамаҡ.

✓Күмертауҙа Башҡортостандың күренекле йәмәғәт эшмәкәре һәм халыҡ мәғрифәтсеһе Мөхәмәтғәли Ғәли улы Искужинға бюст асыу тантанаһы үткәрелде. Бюст уның исемен йөрөткән 13-сө башланғыс дөйөм белем биреү мәктәбе биләмәһендә ҡуйылды. Скульптура авторҙары - Өлфәт Ҡобағошов менән Рәмил Шәфиғуллин. Билдәле педагог һәм йәмәғәт эшмәкәренең иҫтәлеген мәңгеләштереү тураһында ҡарар Республика Хөкүмәте тарафынан 2007 йылдың апрелендә ҡабул ителә. Күмертауҙа 13-сө башланғыс мәктәпкә Мөхәмәтғәли Искужиндың исеме бирелгән. Күмертау ҡалаһының үҙәк урамдарының береһе лә уның исемен йөрөтә. 8-се "Айгөл" балалар баҡсаһы бинаһында иҫтәлекле бареньеф ҡуйыу планлаштырыла.

✓Кеҫә телефондарын файҙаланып ҡылынған енәйәттәр тағы ҡабатлана. Ғәҙәттә, енәйәтселәр телефондан шылтыратып, улының йә ҡыҙының ниндәйҙер бәләгә юлыҡыуы, уны ҡутҡарыу өсөн аҡса талап итеүе тураһында хәбәр итә. Улы йә ҡыҙы булған әсә, әлбиттә, алдаҡҡа ҡаба. Байрам көндәрендә шундай әсәләрҙең береһе уйлап та тормай аферистарҙың банктағы иҫәбенә 60 мең һум аҡсаһын күсерә. Полиция тағы бер тапҡыр иҫкәртә: шикле телефон шылтыратыуҙары булғанда аптырап ҡалмағыҙ, был хаҡта 02-не йыйып, полицияға хәбәр итегеҙ.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ...

## иғтибарҙан мәхрүм түгел

**Яңы йылға аяҡ баҫҡанда һәр кеше, һәр коллектив, ойошма үткән йылдағы эшенә күҙ ташлай, анализлай, уңыштарын, уңышһыҙлыҡтарын барлай. Редакциябыҙ ҡунағы - Өфө ҡала округы хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе Урал КИЛСЕНБАЕВтың да уҡыусыларыбыҙға еткерер мәғлүмәттәре, уртаҡлашыр уңыштары бар.**



### Миллионлы ҡалалар араһындағы хеҙмәттәшлек

2012 йылда Өфөлә беренсе тапҡыр миллионлы ҡалалар йәштәре саммиты уҙғарылғайны. Рәсәйҙең иң ҙур ҡалаларынан килгән коллегаларыбыҙ менән көнүҙәк мәсьәләләрҙе уртаға һалып тикшерҙек, тәжрибә уртаҡлашыу юлдары хаҡында һөйләштек, үҙебеҙҙе башҡалар менән сағыштырыу мөмкинлеге алдыҡ. Былтыр Волгоград ҡалаһында икенсе тапҡыр ошондай уҡ саммит үткәрелде, унда йәштәр ассоциацияһы төҙөлдө. Шулай уҡ Өфө Красноярск ҡалаһы менән дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек бәйләнеше булдырҙы.

Башҡортостанға сиктәш бер нисә миллионлы ҡала булһа ла, тап Себер ҡалаһы менән хеҙмәттәшлек итергә булдыҡ. Сөнки үҙ-ара уртаҡлашыр тәжрибәләребеҙ барлығын асыҡланыҡ. Красноярскиҙа ла йәштәр һаны Өфөләге менән бер сама. Беҙҙә 14-30 йәштәге 290-300 мең кеше 15,5 меңләп йәштәр үҙәктәрендә, үсмерҙәр клубтарында шөғөлләнә, Красноярскиҙа иһә шундай үҙәктәр 2,5 мең генә. Сағыштырыу ҡыҙыҡ ҡына мәғлүмәттәр бирҙе. Әгәр Өфөлә ваҡыттарын бушҡа үткәрмәһендәр өсөн йәштәрҙе масштаблы, күп халыҡ ҡатнашҡан сараларға йәлеп итеү өҫтөнлөк алһа, Красноярскиҙа иһә йәштәр үҙәктәрендә шөғөлләнгән балаларға ғына ярҙам итеү маҡсаты ҡуйыла. Йәғни һайлап алынған балалар менән генә эш алып барыла. Ҡайһы юл һөҙөмтәлерәк, әйтеүе ҡыйын. Икеһенең дә ыңғай йәки кире яҡтары барҙыр, моғайын.

Быйылдан был өлкәлә беҙҙә лә яңылыҡтар көтөлә. Һәр районда айырым бер йүнәлеш буйынса махсус үҙәктәр булдырырға уйлайбыҙ. Был үҙәктәрҙә шөғөлләнеү бушлай ойоштороласаҡ. Беҙҙең маҡсат: һандан сифатҡа күсергә. Беренсе проект Совет районында планлаштырыла. "Тамыр" йәштәр үҙәге базаһында ди-джей студияһы асыласаҡ. Ди-джейлыҡ йәштәрҙе ҡыҙыҡһындырған йүнәлештәрҙең береһе. Шул уҡ ваҡытта был һөнәргә китаптар уҡып ҡына өйрәнеп булмай, кәрәкле ҡорамалдарһыҙ уңышҡа өлгәшеүе ҡыйын. Ә был һөнәргә махсус клубтарҙа өйрәнеү бик ҡиммәт тора. Шуға ла диджей студияһына ихтыяж бар, тигән фекерҙәбеҙ. Шулай уҡ Калинин районында үсмерҙәр өсөн видео-студия асыласаҡ, башҡа райондар ҙа үҙ тәкдимдәрен әҙерләй.

### Отҡорҙар һәм тапҡырҙар клубы хәрәкәте

Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә отҡорҙар һәм тапҡырҙар клубтары хәрәкәте көсәйҙе. Үкенескә ҡаршы, Өфө, һөләтле йәштәре була тороп, КВН буйынса Юғары лигала, йәғни Мәскәүҙә үткәрелгән төп ярышта 1987-1988 йылдан бирле көс һынашҡаны булманы. Бер нисә йыл элек баш ҡала КВН хәрәкәте йәнә йәнләнеп китте. Әлеге ваҡытта ҡала кимәлендә балалар өсөн - Юниор-лига, беренсе тапҡыр ҡатнашҡан студенттар, йәштәр өсөн - Премьер-лига, инде шымарып бөткәндәргә Юғары лига булдырылды. Ҡала кимәлендәге Юғары лигала еңеүсе командалар Сочиҙа үткәрелгән ярыштарға юл ала. Быйыл унда беҙҙең 6 команда ҡатнашты. Был бик яҡшы күрһәткес, тип уйлайым. Шулай уҡ Өфөнөң йыйылма командаһы төҙөлдө. Беҙ уға ҙур өмөттәр бағлайбыҙ. Улар тәбәк ярыштарында, Мәскәү ҡалаһы һәм өлкәһе ярыштарында уңышлы ғына сығыш яһаны. Хәҙер инде төп лигаға сығыуҙы маҡсат итеп ҡуя улар.

Бынан тыш, башҡорт телендә үткәрелеүсе "Шаяниум" бәйгеһе киң таныулыу һәм популярлыҡ яулай бара. Был конкурс Өфөлә йәшәгән мәктәп йәшендәге башҡорт һәм башҡа милләт балалары араһында башҡорт телен пропагандалаған иң яҡшы сара, тип иҫәпләнә. Уҡыусылар матур итеп башҡорт телендә шаяра, тел байлығын күрһәтә. Бәйгенең даими үткәрелеп килеүе, камиллашыуы яҡшы күренеш. Ул үҫеш юлында. Быйылдан "Шаяниум"да еңеүсе командалар күптән түгел ойошторолған "Башҡорт асыҡ КВН лигаһы"ның Юниор-лигаһында уйнаясаҡ.

### Халыҡ-ара хеҙмәттәшлек

Республика әлеге мәлдә ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерләнә. Йәштәр ҙә был мөһим ваҡиғанан ситтә тороп ҡала алмай. Ике йылдан буласаҡ сараларҙы күҙ уңында тотоп, 2013 йылда беҙ Өфөлә блогерҙар, фотокорреспонденттар, журналистар форумы үткәрҙек. Беҙгә алты дәүләттән вәкилдәр килде. Уларҙы Өфөнөң, Башҡортостандың сәнғәт, сәнәғәт, иҡтисад, ауыл хужалығы тармаҡтары менән таныштырҙыҡ. Беҙҙең маҡсат республиканы танытыу ине. Моратыбыҙға ирештек, тип уйлайым. Беҙҙең форумда ҡатнашыусылар тыуған илдәренә ҡайтҡас, киң мәғлүмәт сараларында, интернеттағы блогтарында Өфө, Башҡортостан, башҡорт халҡы тураһында мәҡәләләр баҫтырҙылар. Был сараның ғәмәли әһәмиәтен "Мираҫ" бейеү ансамбле менән Ҡаҙағстанға барғанда ла тойҙоҡ. Өфөгә форумға килеп ҡайтҡан ҡаҙаҡ журналистары, блогерҙары менән бәйләнешкә инеп, Өфө делегацияһы һәм "Мираҫ" ансамбленең уларға барасағын хәбәр иттек. Ә ҡаҙаҡ журналистары үтәсәк концерт хаҡында үҙҙәренең гәзиттәрендә, телевидениеларында мәғлүмәт биреп, беҙгә бушлай реклама эшләне.

Өфөнөң һәр йәш кешеһе Рәсәйҙең ҙур ҡалаларындағы, шулай уҡ донъяның алдынғы дәүләттәрендәге тиҫтерҙәренән ҡалышмаҫҡа, улар менән аралашып, тәжрибә уртаҡлашып йәшәргә тейеш, тип иҫәпләйбеҙ. Сит дәүләттәр менән уртаҡ программалар эшләүебеҙ ҙә ошо маҡсатты күҙ уңында тота. 2012 йылда, мәҫәлән, Өфөнән 13 үсмерҙе Төркиәнең Мерсин ҡалаһына ебәрҙек. Уларға яҡшы мәҙәни программа төҙәлдө, сәйәхәттәр, инглиз телен камиллаштырыу өсөн төрлө дәрестәр, аралашыуҙар ойошторолдо. Быйыл Мерсин үсмерҙәре Өфөгә киләсәк. Шулай уҡ беҙ Ҡаҙағстандың Астана, Ҡытайҙың Шеньян һәм Өфө ҡалаларының үсмерҙәрен бергә йыйып, ҙур сара ойошторорға уйлайбыҙ. Ун көн буйы дауам итәсәк сара ваҡытында сит ил ҡунаҡтары беҙҙең үсмерҙәребеҙҙең өйҙәрендә йәшәйәсәк, уларға иҫтәлекле урындар күрһәтеләсәк, республика менән танышасаҡтар. Был сара өсөн иң әүҙем, һөләтле балалар һайлап алынасаҡ. Ошондай программаларҙың һөҙөмтәһе бөгөнгө көн менән генә сикләнмәй, улар киләсәккә йүнәлтелгән.

**Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ТАШЛАМА, ТИП АЛДАНМА

**Сауҙа үҙәктәрендә һәм магазиндарҙа барған байрам алды ташламалары, акциялар хаҡындағы иғландарҙы ҡайҙа ғына күрмәйһең: телевидение шулар өсөн генә эшләй һымаҡ. Иғландар, һорап та тормай, беҙҙең персональ телефондарыбыҙға ла килеп инә, ә подъездарыбыҙҙы күптән баҫып алды, хатта лифт эсендә лә - шулар. Бындай маҙаһыҙҙарға ышанырға буламы икән һуң?**

- Дөрөҫ шикләнәһегеҙ, артыҡ бәйләнсек иғландарҙың бөтәһенә лә ышанып барырға ярамай, әлбиттә. Йыш ҡына шулай ҙа була: хаҡтарҙы 50 процентҡа төшөрөү хаҡында иғлан иткән магазинда, ғәҙәттә, тауарҙың элекке хаҡы һыҙылып, эргәһенә ҡулдан яҙылған яңы хаҡты күрергә мөмкин. Яңы хаҡ, ысынлап та, 50 процентҡа кәм яҙылған була, ләкин бында һатып алыусыны алдау схемаһы түбәндәгесә эшләнә: акция иғлан итерҙән алда магазинда ташлама күләмендә тауарҙың хаҡын күтәрәләр ҙә элекке хаҡты ташламалы тип күрһәтәләр. Йә булмаһа, ҡайһы бер тауарҙар һатыуҙан ваҡытлыса алып торола һәм аҙаҡ иҫке хаҡ ташлама тип иғлан ителә. Шулай ҙа була: магазинда бөтә тауарға ла ташлама иғлан итәләр, ә һатып алыусы алырға теләгән тауары менән кассаға килеп еткәс кенә тап ошо хаҡтың "ташламалы" булып сығыуын белә. Был тауарға хаҡ иғлан ителгән процент иҫәбенән ҡайтанан хисапланмай, әлбиттә. Ә инде 70-90 процентҡа тиклем ташлама вәғәҙәләүселәргә бөтөнләй ышанырға кәрәкмәй, сөнки унда ни бары 10-20 процентҡа арзанайтылған тауарҙар күрерһегеҙ, ә ҡайҙа 70 процент, тигән һорауға, талашып алып бөтөрҙөләр, хәҙер былары ла юҡ буласаҡ, тип һатып алыусыны бигүк кәрәкмәгән әйберҙе лә "алып ҡалырға" этәрәләр. Дөрөҫөн әйткәндә, яҡшы тауар бер ниндәй рекламаға ла, ташламаға ла мохтаж түгел, шуны иҫтән сығармағыҙ.

## БҮЛМӘ УРЫНЫНА - БҮЛМӘ

**Ҡыҙым менән икебеҙҙең коммуналь фатирҙан һатып алған бүлмәбеҙ бар. Был йортто һүтәсәктәр, ә яңы торлаҡтан биреләсәк фатирҙың артыҡ кв. метрҙары өсөн түләргә кәрәк, тиҙәр. Был дөрөҫмө?**

Авария хәлендәге йорттарҙан күсергәндә фатир (бүлмә) милекселәренә торлаҡ хаҡы түләнә йәки икенсе торлаҡ бирелә. Һәр осраҡ граждандарҙың теләген иҫәпкә алып, урындағы хакимиәт аша башҡарыла. Һатыу-һатып алыу хаҡы фатирға бойондороҡһоҙ хаҡ ҡуйыу хеҙмәте тарафынан билдәләнә. Әгәр был хаҡ менән ризалашмаһағыҙ, башҡа эксперттарҙан яңы хаҡ ҡуйыуҙы талап итеп, судҡа мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

Ә инде яңы фатир бирһәләр, иҫке торлаҡ хаҡы яңыһы иҫәбенә индерелә һәм, әгәр яңыһы ҡиммәтерәк килеп сыҡһа, етмәгән сумма һеҙҙән түләтеләсәк (РФ Торлаҡ кодексының 32-се статьяһы). Бүлмәгеҙ урынына айырым фатир биреү мәсьәләһе, үкенескә күрә, закон тарафынан гарантияланмаған. Һеҙ ҡатнашҡан программала коммуналь фатирға күсереү тыйылмаған хәлдә, бүлмә урынына бүлмә биреүҙәре лә бар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнә.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Киҙеү

❖ Киҙеүҙе кейәү үләне (чабрец) еңә. 2 ҡалаҡ вағланған кейәү үләнен 1 стакан араҡы йәки спиртҡа һалырға ла, ҡараңғы урында 2 аҙна төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1 ҡалаҡ һыуға 15-әр тамсы төнәтмә тамыҙып эсергә. Дауаланыу 10-14 көн.

### Тимерәү

❖ Өлгөрөп етмәгән борсаҡты бутҡа һымаҡ иҙергә һәм йомортҡаның ағын ҡушып болғатырға, тимерәүле урынға һөртөргә.

❖ Еләк һутын, еләген иҙгеләп, тимерәүгә һөртөргә. Был ысул һипкелде, тәнгә сыҡҡан төрлө таптарҙы бөтөрөүҙә лә ярҙам итә.

### Ҡара көртмәле

❖ Яңы әҙәләгән ҡара көртмәлене гастрит булғанда, ҡаталау, ревматизм сирендә, күреү һәләте түбәнәйгәндә көн һайын 300-400 грамм ашарға.

### Тир үләне (цикорий)

❖ Нервылар ҡуҙғыһа, үтә ныҡ үртәлгәндә 400 мл ҡайнар һыуҙа 2 ҡалаҡ вағланған цикорий тамырын бүлмә температураһында төнәтәһең һәм көнө буйы эсеп бөтәһең.

❖ 2 ҡалаҡ вағланған цикорий тамырын ярты литр ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт төнәтергә һәм аппетит күтәреү өсөн, гастрит мәлендә ашҡаҙанға ярҙам итеү өсөн, бауыр ауыртҡанда, үт ҡыуығында таш булғанда көнөнә 3-4 мәртәбә стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

### Мәтрүшкәле ванна

❖ Был ванна бронхит, трахея сирҙәренән файҙалы. 400-500 грамм кипкән мәтрүшкәне ваҡлап, биҙрәлә ҡайнар һыуҙа төнәтеп, ваннаға ҡойһын, температураһы 38-39 градус булһын. Ә арығанлыҡты бөтөрөү өсөн ҡулланһағыҙ, һыуҙың температураһын түбәнерәк, 35-36 градус итегеҙ. Был ванна тимерәү, диатезды дауалай, баш ауыртыуын баҫа.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ҡан ауырыуҙарына бәйле им-том

**Ҡан ағыуын туҡтатыу әпсендәре**

1. Кешенең берәй ере киҫелеп, ҡан аға башлағанда ошо әпсен әйтелгән:

*"Ҡыҙыл энә, ҡыҙыл еп,*
*Ҡыҙыл йөйө йөйләйем.*
*Баҡыр энә, баҡыр еп.*
*Баҡыр йөйө йөйләйем.*
*Тимер энә, тимер еп,*
*Тимер йөйө йөйләйем...* -

Шуны өс мәртәбә әйтеп төкөрһәң, ҡан туктай, имеш...

2. *Алтын энә, алтын еп,*
*Алтын йөйөн йөйләйем.*
*Көмөш энә, көмөш еп,*
*Көмөш йөйөн йөйләйем.*
*Баҡыр энә, баҡыр еп.*
*Баҡыр йөйөн йөйләйем.*
*"Ҡыҙыл энә, ҡыҙыл еп,*
*"Ҡыҙыл ҡан йөйөн йөйләйем.*

**Ҡан боҙолоуҙан әпсен**

*Аҡ таш ағарып ята,*
*Күк таш күгәреп ята,*
*Ҡара таш ҡан тарата,*

- тип һамаҡлап, ауырыу өҫтөнә, сират буйынса аҡ, күк, ҡара таштар һибеп имләгәндәр.

**Тамыр өйәнәген имләү.** Тамыр өйәнәге нәҫелдән килә. Тамыр өйәнәге булһа, аяҡтар шешә, һарғая. Ашҡаҡ табан быуыны ла ауырта, һары һыу йыйыла. Төнөн аяк быуындары өшөй, тартыша. Өйәнәк сыкһа, аяҡтарҙы тик өҫкә, ҡалҡыу ергә һалырға, эҫе һәм һалҡын һыуҙа алмашлап йыуырға, аҙнаһына бер һөлөк һалырға һәм ошоно укырға: "Каны тәнемдә, сөсө телемдә, етер башыңа, тамыр ҡашыңа, ауыр ялҡыны, осор һалҡыны, өйән тотолор, көйән отолор".

## Ен-зәхмәт, пәрей менән бәйле ауырыуҙар

**Ете төрлө еп күмеү.** Кешенең туҡтауһыҙ башы ауырта, тәне һыҙлаһа, ен ҡағылған, тип имләйҙәр. Ундай саҡта: "Ергә һалмайынса, әҙәм булаһы түгел!"- тип әйтәләр. Имсе ауырыуҙың буйын ете төрлө еп менән ете тапҡыр үлсәй. Шунан ул ептәрҙе алып күмә. Күмер алдынан айға ҡарап:

*Ен ҡағылған кешемдең,*
*Төҫө-буйы кипкәндер.*
*Тәңренең көҙрәте булып,*
*Һинең гәзиз бәндәңә*
*Нуры зауыҡ ҡайтҡандыр,*

- ти. Ошонан һуң ауырыу ете аҙнанан да ҡалмай һауығырға тейеш.

**Ете мулла өшкөрөүе.** Ете мулла ауырыуҙың ете ягынан ултырып, китап менән һуға-һуға өшкөрә. Берәү утын ҡырҡып тора, укыныр тора.

- Кил, муйыныңды өҙә сабам, - тип киҙәнеп, ауырыуҙан:

- Кем һукты? - тип һорайҙар. Ауырыу әйтмәй, ҡырталаша.

- Муйыныңды өҙә сабам, - тип янағас ҡына уның исемен әйтә:

- Шул һуғылды.

Кешегә ен, билдәле, кеше һынында һуғыла. Шуға ауырыу уны әйтмәй. Әйттергәндән һуң шул исемде яҙып, утка ташлайҙар. Шунан теге кеше ен елпеүенән яҙыла.

Ен һуғыуҙан һөйләшә алмаһа, был кешегә эт муйылын яндырып, көлө менән был кешенең табан аҫтын ҡыҙҙыралар һәм ҡайнатып, һыуын эсереп ҡоҫторалар.

**Зәхмәт менән бәйле им-том.** "Зәхмәт ҡағылыр, "Бисмилла" әйтеп йөрөгөҙ", - тип әйтә оолар. Тәүҙә уң аяғығыҙҙы атлап керегеҙ, сыҡҡанда ла уң аяғығыҙҙы атлап сығығыҙ. Шулай булһа, эшегеҙ унай була. Тәүҙә һулаҡай аяҡ йөрөмәһен, уң аяҡ йөрөһөн!" - тиҙәр ине.

Зәхмәт килмәһен тип яткан ергә Ҡөрьән китабы, бетеү йәки ун биш тинлек тәңкә һалғандар.

Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.

ӘЙҘӘ, СПОРТСЫ БУЛАЙЫҠ!

# УШУ ТРЕНЕРЫ ҺАБАҠТАРЫ



Һүрәттә - Кәримә Хәйбуллина.

**"Ниндәйҙер буй етмәҫлек хыялың булып та, уны тормошҡа ашырыу юлында әлегә йырып сығып булмай торған кәртәләр ята икән, хыялың тураһында көн дә бер үк ваҡытта ике минут ҡына уйла ла, уйҙарыңды ҡағыҙға яҙып ҡуй", тип кәңәш иткәйне бер аҡыллы ағай. Уйлап ҡараһаң, еңел генә эш кеүек, әммә был кәңәште ишетеүемә ярты йыллап ваҡыт үтһә лә, тәгәйен генә "ике минут"ым һаман да юҡ. Кәңәште ишеттем дә, үҙемә иш итмәнем. Хыялдар булһа ла, улар көндәлек ығы-зығылар араһында күңелгә бикләнгән килеш ҡала килә... Ә бына беҙҙең бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - Сибай ҡалаһында тыуып үҫеп, БДУ-ның Сибай институтын тамамлаған, ушу-таолу буйынса Рәсәй чемпионаттары еңеүсеһе, 1-се дәрәжә "кара билбау"ға лайыҡ булыусы, йәш тренер Кәримә ХӘЙБУЛЛИНА иһә үҙенең баласаҡ хыялын тормошҡа ашырған - Рәсәй чемпионы булған. Ата-әсәләр иғтибарына Кәримәнең ушу-таолу, шулай уҡ уның ҡул аҫтында шөғөлләнгән малайҙар һәм ҡыҙҙар миҫалынан сығып, спорттың балаларға файҙаһы тураһында һөйләгәндәрен тәҡдим итәбеҙ:**

- Сабый сағымда ҡолап, нык ҡурҡып ҡалыуым арҡаһында өс йәшемә тиклем атламағанмын. Бер аҙ үҫә төшкәс, табипҡа барыуыбыҙ, уның миңә спорт менән шөғөлләнергә ҡушыуы иҫтә. Ошо көндән алып минең күңелем спортҡа тартылды. Телевизорҙан матур, һомғол буйлы спортсыларҙың төрлө спорт төрҙәре буйынса сығыштарын ҡарап, "Мин дә ошо ағай-апайҙар һымаҡ көслө, етеҙ булһам ине", тип хыяллана инем. Бер көн мәктәбебеҙгә ҡаланың "Кара аждаһа" клубы тәрбиәләнеүселәре килеп, көнсығыш һуғыш төрҙәре хәрәкәттәренән торған акробатик элементтар менән сығыш яһаны. Киноларҙа ғына күргән ниндзяларға оҡшатып кейенгән балаларҙың шундай ҡатмарлы хәрәкәттәр эшләүенә иҫем китте. Шундуҡ "Кара аждаһа"лағы түңәрәккә яҙылырға тигән теләк тыуҙы. Өйгә ҡайтҡас та был теләгемде атайыма еткерҙем. Ул мәлдә мин башланғыс кластарҙа ғына уҡый инем. "Бер-ике йылдан барырһың", - булды атайымдың яуабы. Икенсе йылына теләгемде тағы бер тапҡыр ҡабатланым. Тағы: "Юҡ, ҡыҙым, иртәрәк", - тигән яуап ишеттем. Өсөнсө йылына, ниһайәт, атайым мине "Кара аждаһа" клубына - тренерҙар Батыр Йәндәүләтов менән Тимур Кәримовҡа алып барҙы. Тәүге көндө беҙҙе тренер Тимур ағай Кәримов ҡаршы алды һәм минән: "Рәсәй чемпионы булғың киләме?"- тип һораны. Мин ыңғай яуап бирҙем. Атайым: "Ҡыҙым бик тырыш, булдырыр ул", - тип, ҡеүәтләп ҡуйҙы.

Ошо көндән минең өсөн, әйтерһең, икенсе тормош башланды. Әлбиттә, тәүҙәрәк бик ҡыйын булды. Ҡыҙҙарҙан бер үҙем, барыһы ла малайҙар, улар минән көләргә йыйын эҙләп кенә тора. Ләкин оҙаҡламай малайҙар ҙа миңә өйрәнде, үҙем дә өйрәндем, үҙ-үҙемә ышанысым да артҡандан-артты. Тренерымдың ышанысын да аҡланым -Сибайҙа үткән кикбоксинг буйынса Рәсәй чемпионатында соло бүлегендә беренсе урын яуланым. 2011, 2013 йылдарҙа Өфөлә үткән Волга буйы федераль округы чемпионатында ҡыҙҙар араһында икенсе, өсөнсө урындарға лайыҡ булдым. Ушу-таолу буйынса бер-нисә йыл рәттән республика чемпионаттарында беренсе урын яуланым.

Үкенескә ҡаршы, тренерым Өфөгә күсте. Минең төшөнкөлөккә бирелеүемде күреп, Тимур Басир улы: "Борсолма, етерлек кимәлдә өйрәндең, хәҙер үҙең дә балаларға ушу серҙәрен өйрәтә алаһың", - тине. Шулай итеп, остазым кәңәше менән тренерлыҡҡа тотоноп киттем. Балалар менән эшләү күңелемә шул тиклем хуш килер, тип көтмәгән дә инем - балалар ҙа миңә тиҙ ылыҡты, үҙем дә уларҙы туғандарым кеүек күрҙем.

Миңә спорт нисек тәьҫир итте, ул ниндәй файҙа килтерҙе, тип һораһағыҙ, иң тәүҙә маҡсатҡа ынтылышты көсәйтте. Маҡсатҡа өлгәшкәндән һуң туҡталып ҡалмаҫҡа, яңыларына ынтылырға күнектерҙе. Был сифаттар миңә тормошта нык ярҙам итә.

Тағы шуны ла әйтеп китәйем: ушу-таолу ушуның һуғышыу талап итмәй торған гимнастика һымаҡ төрө. Ушу-таолуҙа тән һығылмалығы, акробатика һәм эстетика тәрбиәләнә. Нейрохирургтар, сәғәт йүнәтеүселәр һәм башҡа шундай теүәллек яраҡған профессиялар вәкилдәре ниндәй теүәллек, оҫталыҡ менән эшләй, ушу-таолу спорты оҫталары ла шуға ынтыла. Тик ҡоралдар ғына икенсе: беренсенән, ҡул менән аяҡ, икенсенән, ҡылыстар, нунчакиҙар, сыниырлы өс быуынлы ҡоралдар һәм башҡалар. Был ҡоралдар менән эш итергә өйрәнгән ир бала өсөн хоккей уйнарға өйрәнеү еңелерәк. Ҡыҙҙар өсөн дә файҙалы был спорт: ҡатын-ҡыҙға етеҙ ҡулдар, һығылмалы бил, төҙ арҡа бигерәк килешә бит, ә ушу-таолуға йөрөгән кешелә был сифаттар артығы менән була. Әгәр мин дә әсәй булһам, ҡыҙым берәй көн ушуға йөрөргә теләк белдерһә, мин уның теләгенә ҡаршы килмәйәсәкмен. Ушуға йөрөгән ҡыҙҙар һәм малайҙар йүгереүҙә лә бер кемде лә еткермәй, сөнки көндәлек күнекмәләр үҙенең ыңғай һөҙөмтәһен бирә. Тағы ла, ушуға йөрөүсе балалар теләһә ниндәй бейеүҙә лә төркөмдә иң алдыңғы, иң шәбе була. Мин үҙем дә бейеү түңәрәгенә шөғөлләндем. Ҡыҫҡаһы, кем ушуға йөрөй, әллә күпме ыңғай сифаттарға эйә була, тип әйтке килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер минуттың ни тиклем ҡәҙерле икәнен кем яҡшы белә? Бер минут элек кенә поезға һуңлаған пассажирҙыр, моғайын. Бер секундтың ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә, оҙаҡ ваҡыт икәнен дә берәй һәләкәттән котолоп ҡалған кеше генә тейешенсә баһалай алалыр. Ә бер сирек секундтың ҡәҙерен финишҡа икенсе булып килеп ингән спортсы ғына төшөнәсәк. Бына ниндәй нескә нәмә ул спорт. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Кәримә Хәйбуллина ла тренерҙары ярҙамында ошо нескәлекте тотоп алған һәм бөгөн уларҙы балаларға өйрәтә. Бөгөн ул Өфө ҡалаһының "Һуҡмаҡ" үҫмерҙәр клубында (адресы: Ибраһимов бульвары, 23, т.: 273-65-49, 282-38-33) эшләй.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ
яҙып алды.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# МОҢОБОҘ - ТЕЛЕБЕҘҘӘ

**Яңы йыл алдынан Үҙәк телевидениеның 1-се каналы аша барған "Тауыш" конкурсында 25 йәшлек баритон тауышлы Сергей Волчков еңеп сыкты.**

Шарттар буйынса, конкурстың бер этабында йырсылар мотлаҡ рәүештә инглиз телендә йыр башҡарҙы. "Ниңә инглиз телендә һуң?" тигән һорауҙы мотлаҡ рәүештә бирер ине мәғлүмәтле уҡыусы. Конкурс турҙары барышында был һорауға төрлө кешеләр тарафынан яуаптар бирелде лә инде. Яуаптарҙы дөйөмләштергәндә, шундайыраҡ һығымта яһарға мөмкин: инглиз телендәге үҙенсәлекле өндәр тауыштың иң төпкә йәшеренгән мөмкинлектәрен асырға һәм яңғыратырға мөмкинлек бирә икән.

Башҡорт халыҡ йырҙарының асылын да күрһәтә был яуап. Инглиз теләндәге баяғы үҙенсәлекле өндәр башҡорт теленең дә айырып алғыһыҙ өндәре бит. Оҙон көйҙәребеҙҙе телебеҙгә иң яҡын булған татар йә ҡаҙаҡ телдәрендә, йәгни баяғы үҙенсәлекле өндәребеҙһеҙ генә башҡарып ҡараһаҡ, йырҙарыбыҙ нисек яңғырар ине икән?..

Әмир ҒҮМӘРОВ.

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ОЛО ИҘЕЛ ДАЛАЛАРЫ БАШҠОРТТАРЫ



### Башҡорт автономияһы һәм Һамар башҡорттары мәсьәләһе

1917 йылға тарихи Башҡортостан территорияһында бик күп милләттәрҙең ҡатнашып йәшәүе күҙәтелә. Ҡайһы бер урында икенсе милләт вәкилдәре башҡорттарға ҡарағанда күберәк була. Башҡорттарҙың күп өлөшө буласаҡ автономиянан ситтә, тарихи Башҡортостан сиктәрендә йәшәй. Ләкин ул ерҙәрҙе ҡайтарып булмауын аңлау һәм башҡорт милли хәрәкәтенең көсәйеүе "Башҡортостан - башҡорттар өсөн" лозунгыһының тыуыуына сәбәпсе була. Ырғыҙ һәм Кәмәлек башҡорттары Башҡортостанда йәшәргә теләүен белдерә.

1917 йылдың июнендә Башҡорт шураһы төрлө төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәрен Башҡортостанға ҡайтарыу буйынса агитация эшен башлай. Һамар губернаһының Николаевск өйәҙендә интеллигенция тарафынан Башҡорт автономияһы өсөн аңлатыу дәррәү алып барыла һәм съезд үткәреү буйынса эштәр башлана. Һамар башҡорттарының активистары араһында Харис Йомағолов та була. Ул 1919-1920 йылдарҙа Башревкомдың рәйесе вазифаһын биләйәсәк.

1917 йылдың 20-27 июнендә Ырымбур ҡалаһында I Бөтә башҡорт съезы үткәрелә. Территориаль автономия төҙөү маҡсатында Урал тауҙары буйында башҡорттарға һәм башҡа төрки милләттәргә территория биреү мәсьәләһе ҡарала. Шулай уҡ башҡа төбәктәрҙә йәшәгән башҡорттарҙы ошо урындарға күсереү мәсьәләһе лә тикшерелә. Ә буласаҡ Башҡортостан территорияһында йәшәүсе мосолман булмаған милләттәрҙе ситтә йәшәгән башҡорттар күсеп килгәс бушаясаҡ ерҙәргә күсереү варианты хаҡында фекер алышыуҙар бара. Был тәү сиратта Һамар башҡорттарына ҡағыла, сөнки тап улар халыҡтың милләттәштәренән иң алыҫта тороп ҡалған өлөшө була.

II Башҡорт съезында мөрәжәғәт ҡабул ителә, авторҙар децентрализация тип аталған дәүләт идараһы формаһын яҡлап сығыш яһай. Миҫал өсөн "Урал алды республикаһы" тигән вариант тәҡдим ителә. Уның буйынса, Өфө, Ырымбур губерналары һәм Һамар губернаһының Бөгөлмә, Быҙаулыҡ, Боғорослан өйәҙҙәре, Пермь губернаһының башҡорттар йәшәгән көньяҡ өлөшө яңы республикаға инергә тейеш була. Күренеүенсә, был проектта Һамар губернаһының Николаевск һәм Пугачев өйәҙҙәре юҡ. Шуға күрә лә мөрәжәғәтнамәлә, "беҙ ошо территориянарҙан ситтә ҡалған башҡорттарҙы күсерергә тырышасаҡбыҙ", тигән пункт өҫтәлә.

Съезда татар йәмәғәтселеге вәкилдәре лә була. Шуларҙың береһе тарихсы Һаҙый Атласов: "... Һамар губернаһында һеҙ бик бәләкәй өлөштө тәшкил итәһегеҙ. Унда бар мосолмандар бөтә халыҡтың 11 проценты ғына", - тип проекттың тормошҡа ашырыласағына шик белдерә. Уға яуап итеп, Шәриф Манатов: "Әгәр беҙ төрлө өйәҙҙәрҙәге башҡорттарҙы берләштерә алһаҡ, ул саҡта башҡорттар күпселекте тәшкил итәсәк. Беҙҙе Һамар губернаһы менән ҡурҡытырға ярамай, беҙ бер ҡасан да бөтә Һамарҙың башҡорттарҙыҡы булыуы хаҡында һөйләмәнек. Башҡорттар йәшәгән өйәҙҙәр беҙгә яҡыныраҡ, улар Өфө һәм Ырымбур губерналары менән сикләшә. Беҙ үҙ милләтебеҙ йәшәгән көнсығыш өлөштәрен генә аласаҡбыҙ. Ә уларҙа башҡорттар 11 түгел, ә 70 процент тәшкил итә. Әгәр ҡайһы бер башҡорт улыстары был бүлгеләүҙәрҙән һуң ситтә тороп ҡала икән, был артыҡ әһәмиәтле түгел, беҙ уларҙы үҙебеҙгә күсерәсәкбеҙ", - тип яуап бирә. Ҡоролтайҙағы сығыштар, Һамар губернаһында йәшәгән милләттәштәренең яҙмышы бар башҡорттарҙы борсоған мөһим мәсьәләләрҙең береһе булыуын раҫлай.

Артабанғы, 1917 йылдың 11 ноябре менән даталанған 1-се һанлы фарман буйынса, Һамар өлкәһендә Башҡорт автономияһын иғлан итеү ҡоролтайҙың ойоштороу съезына тиклем кисектерелә. 1917 йылдың 15 ноябрендә 2-се һанлы фарманға ярашлы, Һамар өлкәһендәге башҡорт ерҙәре Башҡортостан автономияһының ерҙәре итеп иғлан ителә һәм Башҡортостанға ҡарарға тейеш була.

Ҡоролтайҙың өсөнсө ойоштороу съезы 1917 йылдың 8 декабрендә Ырымбурҙа үтә. Унда ҡабул ителгән резолюцияларҙың береһе тап күсендереүгә арнала. Һамар мәсьәләһе шулай яңғырай: "Все, заселившие Башкирию после 20 апреля 1898 г. путем принудительного отчуждения им земли как результата разных хищнических законоположений и распоряжений царского правительства, должны обмениваться землями с теми из башкир и мусульман, которые остались вне пределов Башкирии и которые пожелают поселиться в ней". Резолюция I Бөтә Рәсәй крәҫтиән депутаттары советының Ер тураһындағы законына нигеҙләнә. Бынан күренеүенсә, 3-сө ойоштороу ҡоролтайы Һамар башҡорттары мәсьәләһен хәл итеү йәһәтенән мөһим рубеж була.

Был ваҡытта милли хәрәкәт пропаганда эшен йәйелдереүгә ҙур әһәмиәт бирә. Уның ярҙамында башҡорттарҙың үҙаңын уятырға һәм "Башҡортостан - башҡорттар өсөн" идеяһын таратырға тырыша. Ә. Вәлидиҙең кешеләре Һамар губернаһында аңлатыу эштәре алып бара. Күскенселәргә финанс яҡтан ярҙам, һалымдарҙан һәм хәрби хеҙмәттән азат итеү вәғәҙә ителә. И.Сабитов, 1924 йылдың декабрендә Күҙәбай улысындағы хәлдәр хаҡында: "Башҡорттарҙың Башҡортостанға күсенеү буйынса тенденцияһы күҙәтелә. Башҡорт халҡы үҙен бик үк яҡшы тоймай, бөтөн улысҡа ике генә (бер башҡорт, бер урыҫ) мәктәп һәм бер ликбез мәктәбе бар. Башҡорттар үҙҙәре үк күсенергә теләй", - тип яҙасаҡ. Шулай итеп, 1917 йылдың июль, август, декабрь айҙарында үткән ҡоролтайҙар Һамар губернаһы башҡорттарын Башҡортостанға күсереүҙе ойоштороу сараһына ҙур өлөш индерә.

**Марсель МАНАПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы. Башы 1-се һанда).**

*ӘЙҘӘ, БАЙ БУЛАЙЫҠ!*

# БОЙОНДОРОҠҺОҘ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

**Үҙеңә, ғаиләңә, милләтеңә, илеңә файҙалы эш эшләйем тиһәң, рухи яҡтан ғына түгел, матди яҡтан да бай булыу мөһим.**

Беҙҙең халыҡта, ғөмүмән, рәсәйлеләрҙә, бай, етеш йәшәгән кешегә шикләнеберәк, хатта нәфрәт менән ҡарай торған ғәҙәт бар. Байҙар - бөтәһе лә насар, ә ярлылар - яҡшы, тигән төптән хаталы ҡараштан инде был. Ысынбарлыҡта, кешенең яҡшы, насар булыуын уның финанс хәленә ҡарап ҡына билдәләп булмай. Кемдер үҙ тир көсөн түгеп тапҡан миллиондарын юғалтҡанда ла бер тамсы ла зарланмай, ә икенсе берәү, киреһенсә, ярлы була тороп та, тиндәрен юғалтҡас, бар ғәләмде ҡарғай - бындай хәлдәргә лә осрап торабыҙ.

Эйе, финанс бойондороҡһоҙлоҡ азатлыҡ бирә. Мохтажлыҡ кисермәгән кеше үҙенең, ғаиләһенең ихтыяждарын үтәүҙә ҡыйынлыҡ күрмәй, һоранып йөрөмәй. Кәрәкле кимәлдә выжданы, илһөйәрлеге, рухилығы булғанда, аҡсаһын дөрөҫ йүнәлтеп, балалар баҡсалары, мәктәптәр, башҡа мөһим социаль объекттар төҙөй, йәмғиәткә ярҙам итә. Бай, шул уҡ ваҡытта башҡалар мәнфәғәтенә битараф түгел кешеләр халыҡҡа ла, йәмғиәттең үҙенә лә файҙа ғына килтерә. Әлбиттә, маһайыу өсөн генә байлыҡ туплау менән шөғөлләнергә ярамай.

Үҙ эшеңде алып барыу өсөн ҡыйыулыҡ бик мөһим сифат ул. Яуаплылыҡтан ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Мәлдәре менән төнгә тиклем ултырырға, ялдарҙан баш тартырға кәрәк булып китә, шунһыҙ ҙа булмай. Ни ҡәҙәр етди, файҙалы эш эшләйем, эҙ ҡалдырам, тиһәң, тырышлыҡ төп юлдашың инде. Шуға күрә лә аҡса эшләүҙән ҡурҡмайыҡ, үҙебеҙ, ғаиләләребеҙ, халҡыбыҙ хаҡына ошо яуаплылыҡтан ҡасмайыҡ.

**Тәлғәт ЮНЫСОВ,**
**йәш эшҡыуар.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Төрлө авторҙарҙың материалдарын ҡарап сыҡҡандан һуң, шуны әйтергә була: XVIII быуаттың аҙағынан XX быуаттың башына тиклем башҡорттарҙың кейеме үҙгәрешһеҙ һаҡланған тиерлек, шулай ҙа уларҙың күптәре ҡулланылыштан сыҡҡан, икенселәре барлыҡҡа килгән. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәүестәре ҙур үҙгәрештәр кисергән.

Ир-егеттәрҙең кейеме күлдәктән, салбарҙан, йөн ойоҡтан һәм итектән торған, баштарына түбәтәй кейгәндәр. Күлдәк өҫтөнән кейгән кейемдәре камзул йәки кәзәки тип аталған. Өҫкө кейем тула сәкмән, тире тундан торған. Улар мотлаҡ билбау менән быуып кейелгән. Түбәтәй өҫтөнән тиренән тегелгән баш кейеме булған.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың кейеме түшелдеректән, күлдәктән, ыштандан, йөндән бәйләнгән ойоҡ һәм итектән торған, баштарына яулыҡ бәйләгәндәр. Күлдәктең тышынан шулай уҡ камзул йәки кәзәки кейгәндәр. Тула сәкмән, туҡыманан тегелгән халат, тун, шәл һалҡындарҙан һаҡлаған. Биҙәүестәрҙең төрлөлөгө тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Бәләкәс ҡыҙҙар, йәш ҡыҙҙар, йәш ҡатындар, урта һәм оло йәштәге ҡатындарҙың кейемдәре һәм биҙәүестәре үҙенең деталдәре менән айырылып торған.

Кейемдәрҙең атамалары бер үк булһа ла, ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар кейеме тегелеше, материалы булйынса ныҡ айырылған. Туҡыманы башҡорттар XVIII быуаттың аҙағында уҡ ҡуллана башлаған. Туҡыма өсөн сүс биреүсе үҫемлектәр сәсеү менән шөғөлләнмәгәндәр, ҡырҙа үҫкән кесерткән һәм киндерҙе генә ҡулланғандар. Шулай ҙа И.Г. Георги яҙыуынса, XIX быуатта киндер сәсеү күренеше булған, сөнки ул сифаты буйынса кесерткән туҡыманан күпкә яҡшыраҡ булған. Һатып алынған әҙер туҡыма башҡорттар араһында бик юғары баһаланған.

XIX быуаттың аҙағына тиклем ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа тире тун кейгән. И. И. Лепехин билдәләүенсә, ҡышын уларҙы баш кейеменән генә айырып булған. Тире тун аҡ йөнлө һарыҡтың тиреһенән тегелгән. Ул бик иркен һәм оҙон булған, тирене башҡорттар үҙҙәре эшкәрткән. Тире тун уҡ яҡтан ябып ҡуйылған, ҡайһы берҙәренең бер-ике төймәһе булған, ирҙәр уны мотлаҡ билбау менән бәйләп йөрөгән. Һуңғыраҡ осорҙа ҡатын-ҡыҙҙар тире тун киймәгән. Сәкмән дә тире тундарҙан айырылмаған тиерлек. Ир-егеттәрҙең сәкмәне төҫөнә ҡарап - ҡара сәкмән, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы аҡ сәкмән тип йөрөтөлгән. Йәш ҡатындарҙың сәкмәне төҫлө ептәр менән биҙәлгән. Көнбайышта һәм төньяҡ-көнбайышта сыба тип аталған өҫ кейеме киң таралған. Тубыҡҡа тиклем оҙонлоҡта, тар һәм биле булған был кейем киндерҙән тегелгән. Ир-егеттәрҙең сыбаһы аҡ төҫтә һәм уға нәҙек кенә ҡара төҫтәге буй-буй һыҙыҡ биҙәктәр төшкән, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы иһә күк ерлеккә аҡ һыҙыҡтар төшөрөлгән. Бөрө өйәҙендә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ир-егеттәр ҙә ҡыҙыл төҫкә ҡара һыҙыҡтар төшкән сыба кейгән. Уны юлға, эшкә бишмәт йәки тун өҫтөнән кейгәндәр.

*✓ Был ғаилә ҡала уртаһындағы таш ҡабырсаҡҡа ғына бикләнеп йәшәүселәр түгелме? Улар йәмәғәтселектәге, үҙ милләтендәге проблемаларға битараф булһа, бәхетле йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, замана геройҙары була алмайҙыр.*

# ТАРИХТАН МӘҘӘНИӘТ

## КИЛӘСӘК ТӘ

**2014 йыл Рәсәй Федерацияһында ла, Башҡортостаныбыҙҙа ла Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителде. Ил һәм республика президенттары ҡабул иткән Указға ярашлы, Мәҙәниәт министрлығы, ҡалалар һәм районлар мәҙәниәт бүлектәре, мәҙәниәткә һәм сәнғәткә ҡағылышы булған һәр төрлө башҡа учреждениелар һәм ойошмалар үҙҙәренең эш пландарын, үткәрәсәк сараларын билдәләйәсәк. Ошоларҙы иҫәпкә алып, беҙ ҙә гәзит битендә мәҙәниәткә ҡағылышлы мәсьәләләр һәм проблемалар хаҡында фекер алышыуҙарҙы башлап ебәрәбеҙ. Тәүге әңгәмәбеҙҙә күренекле сәхнә оҫтаһы, СССР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Гөлли МӨБӘРӘКОВА, Фәйзи Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт бейеү ансамбле етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы Филүс ҠАҘАҠБАЕВ һәм Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры директоры Флүр САЛАМАТОВ ҡатнаша.**

**▸ Бер заман РФ Президенты Борис Ельцин, иң тәүҙә илдең иҡтисадын үҫтереүҙе, шунан һуң ғына мәҙәниәт мәсьәләләре менән шөғөлләнеүҙе күҙ уңында тотоп, "Культура подождет!" тигән киң яңғыраш алған һүҙҙәрен әйткәйне. Ул, асылда, ҡасандыр партия Үҙәк комитетының Генераль секретары Леонид Брежневтың "Икмәк булһа, йыр ҙа булыр" тигән һүҙҙәрен үҙенсә ҡабатланы ғына кеүек. Беҙ бөгөн бөтөнләй икенсе илдә йәшәйбеҙ, башҡа төрлө уйлайбыҙ. Был йылдар эсендә илебеҙ иҡтисады ла йүнләп күтәрелмәне, киреһенсә, түбән генә төштө. Икмәк үҫер илебеҙ баҫыуҙарының ҙур өлөшөндә хәҙер әрем, ҡый үләндәре, ваҡ ағас үҫә. Мәҙәниәтебеҙ иһә, һаман да күтәреүсеһен көтә бирә. Шулай түгелме?**

**Г. Мөбәрәкова:** Беҙҙең илдә мәҙәниәткә һәр ваҡыт "ҡалдыҡ принцибы" буйынса ҡаранылар бит инде. Йәғни мәҙәниәт, сәнғәт нимәнәндер, кемдәндер тороп ҡалғандан финансланды. Был һәр кемгә мәғлүм. Илебеҙҙең үҙенең идеологияһы булмағас, әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт үҙенең төп функцияһын башҡарыр өсөн ҡайҙан ыңғай герой табырға тейеш һуң? Совет осоронда, мәҫәлән, был мәсьәләне бик етди күҙәтәләр ине. Тап ошо сәбәпле хатта тапшырғандан һуң да идеологияға бик тап килеп бөтмәгән спектаклдәрҙе ҡуйыуҙы тыя торғайнылар. Мәҫәлән, Мостай Кәримдең "Ташлама утты, Прометей !"ын, Назар Нәжмиҙең "Гармунсы дуҫ"ын сәхнәгә сығарған саҡта бик көсөргәнешле хәл булды.

Хәҙер идеология булмағас, әҙәбиәттә, мәҙәниәттә һәм сәнғәттә контроль дә юҡ. Яуаплылыҡ сәнғәт әһелдәре елкәһендә генә тороп ҡалды. Йәғни тәрбиәнең һөҙөмтәһе өсөн хәҙер тик улар ғына яуаплы һымаҡ тойола. Хәҙер хатта репертуар һайлауҙа ла сикләүҙәр юҡ. Кем нимәне теләй, шуны сәхнәгә сығара ала. Илебеҙҙең үҫеш йүнәлеше, идеологияһы булмағас, йәштәр төрлө яҡҡа тартыла. Кемдер көнбайышса йәшәргә теләй, кемдер дини сектаға эләгә, кемдер эскегә һалыша, кемдер наркоман булып китә, балалар араһында енәйәтселек арта.

Беҙҙең аҡса ла, иҡтисад кимәле лә талап ителмәгән һаҡланыу сарабыҙ бар. Ул да булһа, халҡыбыҙҙың бай тарихы, мифик боронғолоғо, йола-традициялары, меңәр йылдар буйына һыналған мәҙәниәте, сәнғәте. Йәш быуынға бына ошо ҡиммәттәребеҙҙе һеңдереп өлгөрөргә кәрәк. Хәҙер Хөкүмәтебеҙ айырым сәнғәт әҫәрҙәре өсөн йәштәргә гранттар бирә башланы. Бик яҡшы. Ғүмерҙә булмаған күренеш. Гранттар бирелеү оҙаҡ ваҡыт дауам итһен ине, шул теләгем.

Төп иғтибарҙы бәләкәстәргә һәм йәштәргә йүнәлтеү иң дөрөҫө булыр ине. Сөнки киләсәктә милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың һәм илебеҙҙең яҙмышы беҙ йәш быуынға ни тиклем рух, мәҙәниәт һалып ҡалдырыуға ла бәйле буласаҡ. Бөгөнгө ҡурсаҡ театрҙары, "Тамыр" телерадиоканалы тамашасылары иртәгә йәштәр театрына барһа, иртәнән һуң беҙҙең академтеатрға киләсәк. Әгәр ҙә беҙ ошо сылбырҙы ялғай, быуындар күсәгилешлелеген һаҡлай алһаҡ ҡына киләсәгебеҙ буласаҡ. Шуға күрә мин Азат Йыһаншин менән Рияз Исхаковҡа кескәйҙәр һәм йәштәр өсөн спектакль ҡуйырға, кино төшөрөргә гранттар бирелеүен мәҙәниәтебеҙҙең оло шатлығы тип баһалайым. Гранттар бирелеү йолаға әүерелһен ине.

**▸ Гөлли Арыҫлан ҡыҙы, һеҙ быуна ыңғай герой тураһында әйтә биреп ҡуйҙығыҙ. Бөгөн беҙ кемде ыңғай герой тип атай алабыҙ һуң? Сөнки элек ыңғай геройҙы билдәләгән сифаттар хәҙер бөтөнләй башҡаса атала. Ысынлап та, кем һәм ниндәй ул замандың ыңғай геройы: ул эшләмәйенсә генә байлыҡ туплай алған йылғыр сауҙагәрме, проценттар иҫәбенә кеҫә ҡалынайтыусы банкирмы? Шул уҡ ваҡытта совет осорондағы намыҫлы хеҙмәт төшөнсәһе лә юҡҡа сыкты...**

**Г. Мөбәрәкова:** Ыңғай герой, минеңсә, иң тәүҙә әҙәбиәттә, яҙыусының әҫәрҙәрендә барлыҡҡа килә. Бөгөн ундай әҫәрҙәр, уларҙы яҙыусылар бармы икән? Әллә тормошобоҙ үҙе геройһыҙ тороп ҡалғанмы? Әгәр ҙә ундай геройҙар хәҙерге көнөбөҙҙә булмаһа, уларҙы тарихыбыҙҙан, фольклорыбыҙҙан эҙләп табырға кәрәк бит. Улар бит беҙгә ярҙамға килергә һәр ваҡыт әҙер генә тора. Бәлки, ул геройҙарҙы күтәрергә беҙгә ҡыйыулыҡ етмәйҙер?

**Ф. Саламатов:** Мин, мәҫәлән, хәҙерге замандың ыңғай геройын матур итеп үҙенең ҙур йорттон һалған, тәрбиәле, тәртипле бер нисә балаһы булған намыҫлы ғаилә башлығы йөҙөндә күрәм. Хәҙер фәҡәт ғаилә ҡиммәттәре өҫкә ҡалҡып сығырға тейештер. Ғаилә ҡиммәттәре һуңғы сиратта дәүләтебеҙҙең ҡиммәтенә әүерелергә, дәүләт үҙенең киләсәген шул ғаиләләрҙең йөҙөндә табырға тейештер. Ана шундай ир уҙамандар бар бит беҙҙә. Беҙгә уларҙы табырға һәм күрһәтергә генә кәрәк. Яңыраҡ Өфөлә бер ғаиләлә ҡунаҡта булдым. Ябай ғына кешеләр. Ҡала уртаһындағы ҙур фатирҙарына ысынъяһау итеп ремонт яһағандар. Ғаиләлә барыһы ла тик башҡортса ғына һөйләшә. Әсәй кеше - йорт хужабикәһе. Кәрәк саҡта ул үҙе руль артына ултырып йөрөй, балаларын балалар баҡсаһына, мәктәпкә алып бара, алып ҡайта. Ир кеше ғаиләһен, ҡатынын, балаларын ҡарай. Улар тәрбиә, әхлаҡ хаҡында юғары, пафослы һүҙҙәр ҙә һөйләй белмәй. Ябай ғына тормош менән бәхетле йәшәй. Минеңсә, ошондай ғаилә башлыҡтары - бөгөнгө ыңғай геройҙар.

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Ыңғай геройҙар булһын өсөн уларҙы күтәрә торған мөхит булырға тейештер. Элек ыңғай герой мәсьәләһе ижтимағи ҡоролош системаһы кимәлендә хәл ителгән. Шуға күрә, илебеҙ үҫешендә системалы ҡараш булмайынса тороп, был мәсьәлә хәл ителмәҫ, тип уйлайым. Ә айырым бер ғаилә эсендә генә бәхетле тормош ҡороп буламы икән?

**Г. Мөбәрәкова:** Флүр әйткән был ғаилә ҡала уртаһындағы таш ҡабырсаҡҡа ғына бикләнеп йәшәүселәр түгелме? Улар янъяғындағы, йәмәғәтселектәге, үҙ милләтендәге проблемаларға битараф булһа, бәхетле йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, замана геройҙары була алмайҙыр, минеңсә. Беҙҙең төп герой ауылдалыр ул.

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Ыңғай герой мөхите барлыҡҡа килһен өсөн берләшергә тейешбеҙ. Беҙ иһә тарҡаубыҙ.

**▸ Беҙҙең тарҡаулыҡ, киреһенсә, ыңғай геройҙарҙың, йәғни юлбашсыларҙың булмауынан килмәйме? Бәлки, юлбашсылар булмағанға тарҡаубыҙҙыр? Шул уҡ ваҡытта һәр бер юлбашсыны ыңғай герой тип атай алабыҙмы? Уныһы ла бар. Рәйес Түләктең "Яныу" поэмаһындағы бөтөн көтөүҙе үҙенең артынан янып торған һарай эсенә эйәртеп индергән "башлыҡ һарыҡ" та ыңғай герой түгел...**

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Юҡ, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта ыңғай геройҙың күренмәүе генә юлбашсыларҙың юҡлығын, уларҙың кәрәкмәгәнлеген аңлатмай. Ыңғай геройҙы, минеңсә, заман, ваҡиғалар ағышы тыуҙыра. Ә хәҙер беҙ бөтөнләй икенсе ваҡиғалар, икенсе ыңғай геройҙар системаһында йәшәйбеҙ.

**Ф. Саламатов:** Мин ыңғай герой мәсьәләһенә заман күҙлегенән ҡарамаҫ инем. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең һәр бер донъя һәм Рәсәй һуғышында, ихтилалдарҙа ҡатнашҡан әллә күпме батырҙарыбыҙ бар. Батырҙарыбыҙ сылбырын Алдар батырҙан башлап киткәндә лә, улар бер нисә томдарҙы тәшкил итер ине. Алдар батыр, мәҫәлән, Петр Беренсе ҡулынан ҡылыс алған кеше. Ә ниңә сәхнәбеҙҙә уның һыны ҡалҡырға тейеш түгел һуң?

Ыңғай геройҙы ауылдан эҙләргә мин дә ҡаршы түгел. Тик уны хәҙерге ауылда таба алырбыҙмы икән? Элегерәк беҙ ауылды төп таяныс итеп күрә һәм ауылға таяна инек. Элек мәңгелек изге сығанаҡ булып тойолған ауыл хәҙер ҙур үҙгәреш кисерҙе. Ҡайһы бер ауылдарҙа йүнһеҙлек ҡалаларға ҡарағанда ла күберәк. Хәҙер ҡалаларҙа йәшәүсе ҡыҙҙарыбыҙ һәм егеттәребеҙ ҡайһы бер ауыл йәштәренә ҡарағанда әҙәплерәк. Улар берҙәм, эсмәй-тартмай, әүҙем йәшәү рәүеше алып бара, спорт менән шөғөлләнә. Улар бергәләп мәсеткә йөрөй, намаҙ уҡый, дини байрамдар үткәрә, нигеҙендә уртаҡ дин, уртаҡ тел, уртаҡ ғөрөф-ғәҙәт булған ғаиләләр ҡора.

**Г. Мөбәрәкова:** Мин һеҙҙән айырмалы рәүештә, оптимист түгелмен, егеттәр. Бәлки, тормоштоң һеҙ күргән яҡтарын күреп тә, аңлап та бөтмәйемдер.

**▸ Беҙҙең эраға тиклем йәшәгән боронғо грек философы Аристотель дә йәштәр боҙолдо, мин киләсәгебеҙгә ышанмайым, тигән, Гөлли Арыҫлан ҡыҙы. Философ был һүҙҙәрҙе әйткәндән һуң ике меңдән ашыу ваҡыт үткән, әммә кешелек һаман да йәшәй. Греция ла үҙ урынында...**

**Ф. Саламатов:** Мин ышанам. Мәҫәлән, мин тәүге тапҡыр Өфөгә килгәндән алып ыңғай яҡҡа күпме үҙгәреш булды. Урамда китеп барғанда ла тойола был үҙгәреш. Хәҙер урамда башҡортса һөйләшеүселәр күбәйҙе. Элек ундай хәлдәр булманы. Йәштәр, үсмерҙәр, балалар үҙ-ара рәхәтләнеп туған телебеҙҙә һөйләшеп йөрөй.

*Хәҙер идеология булмағас, әҙәбиәттә, мәҙәниәттә һәм сәнғәттә контроль дә юҡ. Яуаплылыҡ сәнғәт әһелдәре елкәһендә генә тороп ҡалды. Йәғни тәрбиәнең һөҙөмтәһе өсөн хәҙер тик улар ғына яуаплы һымаҡ тойола. Хәҙер хатта репертуар һайлауҙа ла сикләүҙәр юҡ. Кем нимәне теләй, шуны сәхнәгә сығара ала. Илебеҙҙең үҫеш йүнәлеше, идеологияһы булмағас, йәштәр төрлө яҡҡа тартыла. Кемдер көнбайышса йәшәргә теләй, кемдер дини сектаға эләгә, кемдер эскегә һалыша, кемдер наркоман булып китә, балалар араһында енәйәтселек арта. Беҙҙең аҡса ла, иҡтисад кимәле лә талап ителмәгән һаҡланыу сарабыҙ бар. Ул да булһа, халҡыбыҙҙың бай тарихы, мифик боронғолоғо, йола-традициялары, меңәр йылдар буйына һыналған мәҙәниәте, сәнғәте. Йәш быуынға бына ошо ҡиммәттәребеҙҙе һеңдереп өлгөрөргә кәрәк.*

***✓ Хәҙер ошо рәүешле эштән йә дәрестән ҡайтышлай театрға йөрөүселәр бөттө. Хәҙерге кеше йәшәү ритмына, тормоштоң башҡа ваҡ һәм эре мәшәҡәттәренә күберәк бирелгән һәм шунан айырыла алмай.***



# КЕНӘ ТҮГЕЛ... башлана

**▸ Мәҙәниәт йылында ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итеү зарури тип уйлайһығыҙ?**

**Г. Мөбәрәкова:** Боронғо "Өфө-II" ҡаласығы мәсьәләһе был йылда, ниһайәт, ныҡлы рәүештә хәл ителергә тейештер, тим. Был йәһәттән беҙгә татарҙарҙан өлгө алырға кәрәк. Ишетеүемсә, улар табылған бер тәңкәгә генә таянып, Ҡаҙандың Мәскәүҙән боронғораҡ ҡала булыуын иҫбат иткән, тиҙәр. Нияз Мәжитов бер үҙе тиерлек ошо тарихты берәмтекләп йыйып күтәрә, ә йәмәғәтселек йоҡлай. Беҙҙең Мәжитов кеүек үк халҡыбыҙ тарихына битараф булмаған Ғәзим Шафиҡовыбыҙ бар ине. Әгәр ҙә ул бөгөн иҫән булһа, "Өфө-II" ҡаласығы мәсьәләһе әллә күпме кимәлгә күтәрелгән булыр ине. "Өфө-II" ҡаласығын нигеҙле итеп өйрәнеүҙе дауам иткәндә беҙҙең генә түгел, бөтә Рәсәйҙең һәм Европаның тарихи мәҙәниәте яңы кимәлгә күтәрелер ине. Был һүҙҙәрҙе донъяға исеме киң билдәле булған ғалим, археолог, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре докторы Игорь Кызласов әйтә. Беҙҙекеләр уның һүҙҙәрен күтәреп алырға ашыҡмай.

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Беҙ булғандың ҡәҙерен белмәйбеҙ шул. Әле Риф ағай Ғәбитов Ҡаҙанға барып ҡайтты. Уны Татар дәүләт бейеү ансамбленә бейеү ҡуйырға күптән саҡыралар ине. Риф ағай әйтеүенсә, татар бейеүендәге бер үк көй, бер үк башҡарыу манераһы үҫеү мөмкинлеген сикләй икән. Шуға ла Риф ағай татар тарихсылары менән осрашып һөйләшкән, костюмдарын, бейеү материалдарын ҡараған, көйҙәрен тыңлаған. Ысынлап та, уларҙа бейеү сәнғәтен үҫтереү өсөн нигеҙ бик бәләкәй. Ә беҙҙең тарих та бай, мәҙәни материал да быуа быуырлыҡ. Көйҙәребеҙ ҙә күп, костюмдарыбыҙ ҙа ни тиклем үҙенсәлекле һәм бай.

Беҙ йыл һайын бик күп дәүләт ансамблдәре етәкселәре менән осрашабыҙ. Улар беҙгә: "Һеҙ бәхетле халыҡ, һеҙҙең бай тарихығыҙ, колоритлы мәҙәниәтегеҙ һәм Ғәскәровығыҙ бар. Ғәскәровтың бейеүҙәренән генә лә репертуарығыҙҙы байыта алаһығыҙ ", - тиҙәр. "Ғәскәровығыҙ бар", тиҙәр, "булған" тимәйҙәр. Хәҙер донъяла Моисеев, Ғәскәров, Годенко кеүек балетмейстерҙар юҡ. Беҙҙә әле хәлдәр шөкөр. Һәр хәлдә, Ғәскәров юлын ҡыуыусы балетмейстерҙар юҡ түгел.

**▸ Үҙ халҡының тарихына битараф, үҙ тарихын белмәгән кешене мәҙәниәтле кеше тип әйтеп буламы? Мәҙәниәт йылын беҙ тарихыбыҙға мөнәсәтебеҙҙе ыңғай яҡҡа үҙгәртеүҙән башларға тейеш түгелме?**

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Дөрөҫ. Мәҙәниәт тарихтан айырылғыһыҙ. Тарихҡа мөнәсәбәт тә үҙ нәүбәтендә мәҙәнилек билдәһе.

**Г. Мөбәрәкова:** Ҡаҙағстанда гастролдә булдыҡ. Ундағы милли интеллигенция вәкилдәре менән осрашҡанда бер ҡаҙаҡ ғалимының һүҙҙәренә иғтибар иттем. Ул ҡаҙаҡ халҡының тарихын тулыһынса аяҡҡа баҫтырырға теләүҙәре хаҡында белдерҙе. Бынан нимә әйткем килә: мәҙәниәт кенә тарихтан айырылғыһыҙ түгел, ә киләсәк тә тарихтан айырылғыһыҙ.

**Ф. Саламатов:** Тарих фәне ваҡиғаларға, даталарға һәм шәхестәргә нигеҙләнә. Был йәһәттән беҙҙең бик күп һоҡланғыс шәхестәребеҙ бар. Шул шәхестәрҙе күтәреү тарихыбыҙҙы ла өйрәнеүгә алып килә, киләсәгебеҙҙе лә яҡтырта.

**▸ Сәнғәт, мәҙәниәт өлкәһе кадрҙар менән дә тулыланып торорға тейеш. Был йәһәттән ниҙәр әйтерһегеҙ?**

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Хәҙер Өфө сәнғәт академияһының актерҙар әҙерләү бүлегенә йылдан-йыл йәштәр әҙерәк килә. Бигерәк тә егеттәр әҙ. Йәштәр актер, бейеүсе, музыкант, бер һүҙ менән әйткәндә, сәнғәт әһеле булыуҙы етди һөнәргә һанамай. Был ҡайҙан киләлер инде?..

**Ф. Саламатов:** Был - ҙур яңылышлыҡ. Театр, кино актеры, бейеүсе, музыкант булыу каторга хеҙмәтенә тиң. Унда күл-күл тир түгергә кәрәк. Бәлки, театрҙың тамашасы залынан ғына был һөнәрҙәр етди булып күренмәйҙер. Ә бына театр хеҙмәткәрҙәре йөрөй торған артҡы ишектән барып инһәң, унда бөтөнләй икенсе донъя. Бында, бәлки, сәнғәт, мәҙәниәт әһелдәренең социаль хәле хаҡында һүҙ алып барыу урынлылыр, тик һөнәрҙәр хаҡында түгел.

**▸ Ошоларҙан сығып, шундай фекер әйтергә буламы: мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендә таланттарҙың потенциалы тулыһынса файҙаланылмай...**

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Була. Ни өсөн тигәндә, беҙ талантлы шәхестәрҙе тулыһынса сәнғәткә, мәҙәниәткә йәлеп итә алмайбыҙ. Шул уҡ Риф Ғәбитовты алһаҡ та, ул туҡтауһыҙ ижади эҙләнеүсән балетмейстер. Тик уны, нисектер, бейеү сәнғәтенән ситтәрәк йөрөтәләр кеүек.

**Ф. Саламатов:** Өҫтәүенә, беҙҙә таланттар ифрат та күп. Шуға талантлыларҙың барыһын да йәлеп итеү мөмкин дә түгелдер, бәлки?

**▸ Халыҡсан сәнғәт, профессиональ сәнғәт, академик сәнғәт, тиҙәр. Улар бер-береһенән нисек айырыла һуң?**

**Ф. Саламатов:** Халыҡсанлыҡ, һис һүҙһеҙ, иң юғары кимәл һанала. Шул уҡ ваҡытта академик кимәлгә еткән сәнғәт әһеле халыҡсан булмауы ла бар. Шул уҡ ваҡытта һәүәҫкәр халыҡ театры актеры ла академик кимәлдә уйнай алмаҫҡа мөмкин. Мәҫәлән, Гөлли апайҙы берәү ҙә халыҡсан уйнамай, тип әйтә алмай. Сөнки ул юғары профессиональ, академик кимәлдәге сәхнә оҫтаһы. Тимәк, юғары профессионаллек - ул халыҡсанлыҡ. Шулай уҡ Риф Ғәбитов филология факультетын тамамлаған. Әммә ул тыумышы менән бейеүсе һәләтенә эйә. Бейеүселәр әҙерләү мәктәбендә уҡымауына ҡарап ҡына беҙ уны профессиональ бейеүсе түгел тип әйтә алмайбыҙ. Беҙ уны юғары профессиональ бейеүсе, балетмейстер итеп беләбеҙ.

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Шул уҡ "Гөлнәзирә" бейеүен алып ҡарайыҡ. Ул бейеүҙе Фәйзи Ғәскәров ауылдан-ауылға йөрөп, халыҡтан йыйып хасил иткән. Халыҡсан итеп ҡуйған. Яҙманан ошо бейеүҙе 60 йыл элек нисек бейегәндәрен ҡараһаҡ, халыҡсан бейегәндәре күренеп тора. Хәҙер инде шул уҡ бейеүҙе хәҙерге башҡарылыш менән сағыштырып ҡарайыҡ. Ер менән күк араһы. Әммә мин, элек насар бейегәндәр, тип әйтә алмайым.

**▸ Ә ни өсөн Мөхәммәт Иҙрисов менән Йәнғәле Вахитов "Байыҡ"ты бейей башлаһа, йөрәк дөпөлдәй башлай ҙа, хәҙерге профессиональ тип һаналған бейеүсе башҡарһа, ундай дөпөлдәү тоймайбыҙ һуң?**

**Г. Мөбәрәкова:** Хикмәт, минеңсә, бында ябай ғына: улар аяҡ менән генә түгел, йөрәк, рух менән дә бейегән.

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Шул уҡ Рәшиҙә апай Туйсинаның бейеүен генә алайыҡ. Хәҙер йәштәр Рәшиҙә апайҙың хәрәкәттәрен бермә-бер ҡабатлай ала. Тик уларҙың бейеүендә Рәшиҙә апайҙың "Заһиҙә"һе генә юҡ.

**Г. Мөбәрәкова:** Был феноменды аңлатып булмайҙыр ул. Тойоп ҡына булалыр. Мин бик сағыу талантлы, тырыш йәштәрҙе беләм. Тик уларҙы үҙ ваҡытында файҙаланып, таланттарын үҫтереп өлгөрөргә ине.

**▸ Хәҙерге замандың техник мөмкинлектәре тамашасыларҙы күберәк үҙ йорттарына бикләй. Тамашасыларҙы театрҙарға, концерттарға, башҡа мәҙәниәт сараларына күберәк йәлеп итеүҙең ниндәй саралары бар тип уйлайһығыҙ?**

**Ф. Саламатов:** Мин Мәҙәниәт йылын нәҡ театрҙарға йөрөүҙән башлар инем. Ә театрҙарға йөрөүҙең төрлө сараларын ҡулланып ҡарарға кәрәк. Мәҫәлән, театрға ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ матур киске күлдәктәрҙә килергә тейеш, тип хәбәр итергә була. Һәр ҡатын-ҡыҙҙың гардеробында юбилей йә башҡа тантанала бер генә тапҡыр кейелгән күлдәге мотлаҡ һаҡлана. Ә театрҙың ошондай саҡырыуы был матур күлдәкте тағы бер тапҡыр кейеү мөмкинлеге бирер ине...

**Г. Мөбәрәкова:** Әлбиттә, тамашасыны театрға килтереүҙең иң төп юлы - яҡшы спектаклдәр...

**Ф. Саламатов:** Элек студент саҡта берәй яңы спектакль ҡуйылһа, уны дәрестән тура барып булһа ла ҡарай инек. Хәҙер ошо рәүешле эштән йә дәрестән ҡайтышлай театрға йөрөүселәр бөттө. Хәҙерге кеше йәшәү ритмына, тормоштоң башҡа ваҡ һәм эре мәшәҡәттәренә күберәк бирелгән һәм шунан айырыла алмай. Мәҙәниәткә ихтыяж булһын өсөн кешенең ваҡыты һәм аҡсаһы булыуҙан тыш, тағы ла ниндәйҙер сифаттарға эйә булыуы талап ителәлер, күрәһең...

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Беҙ әле Япониянала булып ҡайттыҡ. Уларҙа аралашыу мәҙәниәте көслө. Япондарҙың беҙгә ҡарата ғына түгел, үҙ-ара мөнәсәбәт камиллығына ла иҫебеҙ китте. Улар үҙ илдәренең ысын патриоттары. Улар талап та итә, шул уҡ ваҡытта ғәфү үтенә лә беләләр. Ғәфү итә лә беләләр.

**▸ Сөнки япондар үҙ халҡының тарихын яҡшы белә шул...**

**Ф. Ҡаҙаҡбаев:** Бәлки, уларҙың беҙҙеке кеүек бай колоритлы бейеүҙәре лә юҡтыр, әммә, һеҙ әйткәнсә, тарихтарын яҡшы белеүе, үҙ иле, халҡының тарихы менән ғорурланыуы уларҙы юғары мәҙәниәтле иткән.

**Ф. Саламатов:** Һәр бер юғарылыҡ үҙ-үҙебеҙҙән башлана шул.

**Г. Мөбәрәкова:** Бына "Тамыр" каналы үткәргән сараларға Өфөнән генә түгел, бар республиканан халыҡ эркелеп килә. Улар хатта бер ай элек үк билет алып ҡуя һәм был сараларға эләгеү - бәхетлеләр өлөшө. Бында каналдың исеменән үк күренеүенсә, тамырға, йәғни халҡыбыҙ тарихына ынтылыш рухы бар. Ҡайҙа тарихҡа ынтылыш, шунда көслө рух, шунда юғары мәҙәниәт була.

***Ыңғай геройҙы ауылдан эҙләргә була. Тик уны хәҙерге ауылда таба алырбыҙмы икән? Элегерәк беҙ ауылды төп таяныс итеп күрә һәм ауылға таяна инек. Элек мәңгелек изге сығанаҡ булып тойолған ауыл хәҙер ҙур үҙгәреш кисерҙе. Ҡайһы бер ауылдарҙа йүнһеҙлек ҡалаларға ҡарағанда ла күберәк. Хәҙер ҡалаларҙа йәшәүсе ҡыҙҙарыбыҙ һәм егеттәребеҙ ҡайһы бер ауыл йәштәренә ҡарағанда әҙәплерәк. Улар берҙәм, эсмәй-тартмай, әүҙем йәшәү рәүеше алып бара, спорт менән шөғөлләнә. Улар бергәләп мәсеткә йөрөй, намаҙ уҡый, дини байрамдар үткәрә, нигеҙендә уртаҡ дин, уртаҡ тел, уртаҡ ғөрөф-ғәҙәт булған ғаиләләр ҡора.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәҙәниәт, сәнғәт хаҡында ниндәй генә юҫыҡта һүҙ башлаһаҡ та, һәр ваҡыт тарихҡа бара ла төртөләбеҙ. Тарихһыҙ халыҡ та, уның мәҙәниәте лә юҡ шул. Мәҙәниәт хаҡындағы һөйләшеүҙәрҙе Мәҙәниәт йылында дауам итербеҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ **Туҡтаны ла бит шул урында, әйтеп тә бөтөрмәне. Башлайһы ла булмаған ул һүҙҙе. Тик теле үҙенә ҡаршы һөйләп тик торҙо. Их, телһеҙ булһа икән ул шул минутта!**





Гөлнур ЯҠУПОВА

# СОНАР

(Хикәйә)

*"Дөрөҫлөккә оҡшамаған һымаҡ хәҡиҡәттән дә гүзәлерәк нәмә юҡ".*
*Стефан Цвейг.*

...Әсәһе килене тураһында тәүләп шик белдергән көндә Илнур баҡсала түтәл утап ҡалған Зәһираға өндәшмәй генә эшенә китте. Юҡ мәшәҡәтен бар итеп, тегендә-бында һуғылып, һуң ғына ҡайтты. Ишек асып көткән кәләше муйынына һарылды, йөҙөнә күҙ ташланы. Ҡапыл, бармаҡтары ҡурҡышҡан ҡоштар кеүек, ҡауштап, ҡалтырап китте, керпектәре дерелдәне. Илнур уны шул тиклем "тыңларға" өйрәнгәйне, был "Ни булды, йәнем?" тип һорауына:

- Бер ни ҙә булманы, - тип яуапланы ла, эскә үтте. Әле уның күңелендә кәләшенә ҡарата бер ни ҙә үҙгәрмәгән һымаҡ. Ләкин... Әсәһенең әлеге ысынын белмәйенсә, юрамал ғына әйтеп киткән һүҙҙәре уны әллә нишләтте. "Телһеҙ ҡатын менән ғүмер итергә? Туған-тыумаса, дуҫ-иш менән ҡатышырға..." Ошондай уйҙар ағас олонон эстән кимергән ҡорттай, уның йәнен ашай башлағайны инде.

Туй ҙа үткәрмәнеләр. Кәләшенең телһеҙлеген кеше белер тинеме? Әйтерһең, утты итәк аҫтында йәшереп була. Йә берәй иҫәүәне килеп, йырла, тип бәйләнер... Йә... әй, эҙләнһәң, сәбәп күп инде. Һәр мөхәббәт һынауға дусар, тип дөрөҫ тә әйтәләр икән. Кемгә нисектер, Илнурға иң ауыры төштө кеүек һынауҙың һәм ул... күтәрә алманы уны.

Әсәһе менән яйлап бер сама аңлаштылар. Ах итте ул, ух итте. Киленен яратып өлгөрһә лә, улының телһеҙ ҡатын алыуына һис күңелен күндерә алманы. Зәһира өйҙә юҡ мәлдә генә көтөп ала ла, тотона:

-Киленең менән рәхәтләнеп һөйләшеп тә ултырмаған ҡарт көнөңдә... Ни ҡоҙағыйым эргәлә түгел. Бөткәнме ауылда ҡыҙҙар, әллә ҡайҙан, әллә кемде етәкләп лә ҡайт, имеш. Кәңәш юҡ, төңәш юҡ.

- Өйлән, тип, быуыныма төштөң бит, әсәй.

-Нисәмә йыл буйҙаҡ йөрөгәнеңдә, ниңә шулай ашыҡтың, әҙерәк һынашырға булмаймы? Их, үҙем дә бит, тәү күреүҙән ебенем дә төштөм, әллә нимәһе менән эс-бауырыма үтеп инде бит ул килен-балаҡай.

- Һөйгәнемдә таптым, тигәйнем...

- Эй, балам, һөйгән һөйгәнең менән нисек тә йәшәрһең дә ул, - тип йомшап та китә әсәһе. - Уф, Алла, кеше нимә тиер, дуҫтан дошман күп. Ҡалала йәшәмәйбеҙ бит, ауылда, бер нәмә йәшерерлек түгел.

Көн артынан яйлап көн үтә, кеше килмәй тормай, килгән береһе менән ҡарсыҡ зарын уртаҡлаша. Тегеләр, күренеп тора, уны ҡыҙҙырып ҡына китәләр. Бер шулай бик бырхып һөйләнеп йөрөгәндә килеп сыҡты ла инде иң ҡот осҡос һүҙ.

- Әйтмәгән, йәшергән. Вәт мут, егетте эләктергәнсе йәшергән. Нишләп был бер һүҙ өндәшмәй, тип йөрәгем һеркелдәгәйне лә, оялсандыр, тинем. Ай, улым харап булды, ай, балам әрәм булды. Телһеҙҙең балаһы ла телһеҙ була инде!

Шул урында әсәһе шып туҡтаны ла, ҡото осоп Илнурға ҡараны. Әсә менән улды бер ыңғай шаңҡытты был һүҙ.

* * *

...Йәй үтте. Көҙ ҡырҡмаһа-ҡырҡ эш менән тиҙ генә үтеп китте. Илнурҙың минут ваҡыты булманы, өйгә йүнләп йоҡмаһы. Шуға ла ундағы ҡатмарлы хәлдәр үҙенән-үҙе бөтөр һымаҡ та тойолдо. Зәһираның тегенсе икәнен белеп ҡалған рәйес инде нисәмә йыл буш торған оҫтахананы ремонтлатып, шунда эшкә саҡырҙы. Тағы өс ҡыҙ ҡушылып, татыу ғына эшләп киттеләр. "Зәһира еңгә өйрәтте", тип ул ҡыҙҙар арыу уҡ әйбер тегеп ташлаған, ти...

Ниһайәт, оҙон ҡыш килде. Инженерҙың әллә ни эше юҡ, гараж тирәһен урап, конторағa барып ҡайта ла гәзит уҡыштыра, кистәрен клубҡа сығып китә. Зәһира өндәшмәй, әсәһе тыймай. Барып бильярд төртөп, ирҙәр менән тәмәке тартып ҡайтҡандан ни була?

Ҡәйнә менән килен уны көткән арала ҡул эше менән була. Ап-арыу аңлашалар. Ситтән күҙ һалһаң, үҙ-ара һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәгәнгә оҡшай. Йыш ҡына ҡарсыҡтың арғы остағы әхирәте инеп ултыра. Ҡаланан отпускыға ҡайтҡан ҡыҙы Рәсиләне лә эйәртеп керә. Рәсилә менән Зәһира дуҫлашып та китте. Аҙаҡ хат алыша башланылар.

Ә клубта, ҡәҙимгесә, йәштәр кино бөтөр-бөтмәҫтән фойеға сығып, тансаға тотона, өлкәнерәк ир-ат айырым бер бүлмәгә йыйылып гәп һата. Имеш, ҡатындар хәбәр һатырға ярата. Ә ирҙәрсе? Бер-береһенә төрттөрөшөп, йәнәһе, мәҙәкләшеп рәхәтләнгән булалар. Берәүҙең бисәһе иренең эшенә барып тауыш күтәргән. Әллә нисә кис сурытырға етте шул хәбәр. Теге ир, бахыр, ҡорҙаштарына ҡушылып, үҙенән үҙе көлгән була, бәй, нишләһен. Мәрәкә инде.

-Бына, мәйтәм, Илнурға ул яҡтан рәхәт, кәләше әрепләшеп ыҙалатмай, - тип һалмаһынмы һүҙ араһында кемдер. Шыма ғына итеп уға күсә лә китте хәбәр.

- Ун һүҙеңә бер яуап юҡтыр, э?

- Ҡәйнә ҡарсыҡ ризалыр инде, уларҙың бит теләгәне телһеҙ килен...

Клубҡа Илнур шунан һуң һирәгерәк йөрөй башланы. Зәһира башта быға һөйөндө, әммә аҙаҡ уның өйҙә булыуы булмауынан ауырыраҡ икәнен аңланы. Кис буйы ире ләм-мим һөйләшмәй тумһайып тик ултыра. Уға әллә ниҙәр әйтергә, түгелеп уйҙарын сисергә уҡтала ла Зәһира... Сараһыҙлыҡтан күҙенән йәш атылып сыға. Илнур быға түҙә алмай, янына килеп, кәләшен йыуата, өндәшмәй генә сәстәренән һыйпай.

- Аңламайым һине, Илнур, аңламайым! - ти йәш ҡаплаған зәңгәр күҙҙәр.

* * *

...Ғинуар урталары ине шикелле, Зәһираның әсәһенән хат килде. "Ҡыҙым, Өфөгә данлыҡлы экстрасенс килә, уның һиңә ярҙам итеүе ихтимал", тип яҙғайны ул.

- Барайыммы, ебәрәһеңме? - тип ҡараны Зәһираның өмөт тоҡанып киткән күҙҙәре. Илнурҙың күңелендә лә өмөт уянды. Ҡатынын Өфөгә үҙе оҙатып ҡуйырға булды. Автобуста Зәһира ҡулдарын иренең ҡулдарына һалды, нескә бармаҡтар көслө баҙыҡ бармаҡтарға үҙ телендә күп нәмәне һөйләне. Әйтелмәгән бер һүҙ ҡалманы кеүек.

Төш ауыуға Өфөгә барып инделәр. Ҡәйнәһе эштән ҡайтып ҡына тора ине. Әсәһе ҡыҙына ҡараны ла ҡатты: бөтөрөнгән, ҡоро күҙ тороп ҡалған.

- Ни булды, кейәү, әллә сирләйме Зәһира? - тип хафаланып Илнурға өндәште ҡәйнәһе.

- ...

-Балам, бер-бер хәл булдымы әллә?

Зәһираның ҡаштары сөйөлөп китте лә, үҙ һүҙле бер ҡиәфәттә ҡатып ҡалды, ярһып, башын һелкте, бер ни ҙә булманы, йәнәһе.

Илнур үҙенең иркә, тыңлауһан, хатта күндәм тип уйлаған ҡатынын тәүләп шулай ныҡышмал һүрәттә күреп ғәжәпләнде. Әкренләп хәлдең айышына төшөндө ҡәйнәһе. Йөрәк дарыуы эсеп алды, иланы ла, буғай, күҙ тирәһе ҡыҙарынып йөрөнө. Ай, түҙем дә икән үҙе, кискә генә һүҙ ҡуҙғатты.

- Һуң, кейәү, белә-күрә алдың, хәҙер үкенәһеңме?

- Баштуҡ белмәнем шул.

Зәһира иренең был һүҙҙәрен ишеткәс, уға шундай итеп ҡараны, әйтерһең, уның тәнен үтәләй йөҙ уҡ тишеп үтте. Бөгөн дә янында булып, бөгөн дә ҡараһын ине шулай, түҙер ине, мең уҡҡа ла рәхәтләнеп түҙер ине. Ә ул саҡта һүтелде лә китте:

- Тәү осрашҡанда уҡ аңғартманы бит, исмаһам...

Туҡтаны ла бит шул урында, әйтеп тә бөтөрмәне. Башлайһы ла булмаған ул һүҙҙе. Тик теле үҙенә ҡаршы һөйләп тик торҙо. Их, телһеҙ булһа икән ул шул минутта!

-Ярар инде... - тине ахырҙа Илнур, ҡәйнәһенән тынысландырырға теләпме, үҙенме. - Хәҙер нишләмәк?

- Нишләмәк, тип, ҡыҙымды көсләп тағып ебәрәһем юҡ, үкенеһең икән, ҡалдыр ҙа кит, артыҡ түгел ул миңә...

Зәһира йүгереп барып әсәһен ҡосаҡланы, кухняға әйҙәп алып китте. Илнур балконға тәмәке тартырға сыҡты. Бүтәнсә һүҙ ҡуҙғалманы. Иртәгәһен ҡайтырға юлланды. Зәһира ун көнгә ҡала ине, теге экстрасенс сеанстарын башлаған икән. Ярар, кем белә, мөғжизәләр донъяла булып тора бит. Бәлки? Хәйер, дөрөҫөн әйткәндә, Илнур өсөн Зәһираның телгә килеүе мөһим дә түгел, хатта кәрәк тә түгел ине. Бүтән мөғжизәне - мөхәббәтенең тәүге хәлендә, иҫерткес, һуш юйырлыҡ сихырға эйә хәлендә йөрәгенә кире әйләнеп ҡайтыуын көтә ләһә ул. Әле быны ныҡлап аңлап та етмәй, әммә һағышының сәбәбен тойомлай.

- Килеп алмаһаң, ебәрмәйем ҡыҙымды, - тип ҡалды ҡәйнәһе. Ҡалай уҫал, килеп алмаҫ та ҡуйырым, үәт, тип уйлап ҡуйҙы Илнур.

Поезға төштө был юлы. Вагонда ирекһеҙҙән ике ҡатындың һөйләшеүенә шаһит булды. Улары ла әллә нимәгә шулай дәртләнеп алғандар, кеше ишетә тип тормай, ҡыҫҡырып тороп һөйләшәләр.

-Әхирәт, һинең менән ҡунаҡҡа йөрөрлөк түгел, тәки берәйһенең башын әйләндерәһең, ә? Йәш сағында, ярай, үҙең һылыу, үҙең һомғол инең. Хәҙер кәүҙәң дә бөткән инде ялпайып, хи-хи-хи.

- Ә кем уларға кәүҙәгә күҙ һалырға ирек бирә? Нимәгә миңә Хоҙай ҡыйғас ҡара ҡаш биргән дә, яныр торған күҙ биргән? Бер генә ҡарап, эстәрен өҙөм дә ҡуям. Кәүҙәмдә күрергә өлгөрмәҫ элек үк ғашиҡ булалар ҙа ҡуялар!

- Кит, һин әйтерһең инде. Ә миңә нишләргә? Битем табаҡтай, күҙем ҡыҫыҡ, танауым инде...

- Уфылдама юҡҡа. Һинеке кеүек толомдар кемдә бар? Ираттың оҙон сәскә һушы китә, белгең килһә. Күрһәтә генә бел. Аяҡтарың матур, әхирәт, гел күҙем ҡыҙа. Уныһына ла тегеләр йығылып китә...

Нишләптер ошо һөйләшеү аҙаҡ та йыш иҫенә төштө Илнурҙың. Ҡатын-ҡыҙҙың ныҡ йәшереп тотҡан серҙәренең бер семтемен генә булһа ла асҡандай тойҙо ул үҙен. Иҫенә төштө иһә, Зәһираға асыуы ҡабара. Ул да бит уны шулай ҡармаҡлаған. Матурлығы менән хыялландырған.

Әллә ниндәй тойғо биләп алды шул мәлдәрҙә Илнурҙы. Уға кәләше лә йәл, үҙе лә йәл, йәшлеге, киләсәге, тағы әллә нимәләр йәл. Әле уйлаһаң, иҫәрлегенә, йән ваҡлығына баш була алмаған ул, шул ғына. Хәҙер килеп бер нәмәне лә төҙәтерлек түгел. Аҡылы ла асылды, күңеле лә киңәйҙе, йөрәге лә ныҡынды - ә нимәгә хәжәт?

...Зәһираны Өфөлә ҡалдырып киткәненә ун көн үтте, ун ике көн. Илнур ҡымшанмағас, әсәһе түҙмәне, килене артынан үҙе китте.

- Яманмы, яҡшымы - үҙемдеке, - ти бит әле.

Иртәгәһенә һин дә мин ҡәйнәле-киленле ҡайтып төштөләр. Илнур кәләшен үлеп һағынһа ла, сер бирмәгән булды. Зәһираның тағы күңеле кителдә, һөйләшмәне. Тағы шул, һөйләшмәне, ти ҙә уйлай был Илнур. Телһеҙ һөйләшәләр шул! Ә элек, бәхетле көндәрендә һөйләшә ине ләһә?

...Төндәр бығаса уларҙыҡы ине. Ниндәйҙер көс уларҙың мөхәббәтен һаҡлай, аралағы көртәләрҙе алып ташлай һымаҡ.

- Һағындым! - тип бышылдай Илнур, Зәһираның башын һаҡ ҡына мендәрҙән ҡалҡытып үҙенең беләгенә һала - ә ҡатыны өсөн ошо көсө ҡабарып торған беләктән дә йомшағыраҡ мендәр юҡ.

-Мин дә һине өҙөлөп һағындым! - ти Зәһира: уның иркә бармаҡтары Илнурҙың тыңлауһыҙ шырт сәстәрен һыйпай, әйтерһең, биш тешле тылсымлы тараҡ менән йомшаҡ ҡына итеп тарай...

Өфөнән ҡайтҡан кисте Зәһира үҙен нисектер сәйер тотто. Ҡыҫып ҡосаҡлағайны, ҡурҡынып, этеп ебәрҙе. Шунан иренең усын иплап кенә үҙенең эсенә ҡуйҙы, тыңла, тигәндәй, ишара итте. Илнур башта аптырап ҡалды һәм ҡапыл аңлап алды.

- Беҙҙең балабыҙ буласаҡмы?

Илнур ул төндә кәләшен арығансы күтәреп йөрөнө. Шатлыҡ хисе уның йәнен талаған бөтә башҡа хистәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарҙы ла, үҙе генә киңәнеп хакимлыҡ ҡылды. Тағы таң атты. Аттырмаҫтай була ине Илнур шул саҡтағы таңдарҙы! Ә таң ата, тағы аҡыл (әллә аҡылһыҙлыҡ) уянып, һиҙгер күҙен аса, тағы һәр уйындың, һәр ҡылығындың айҡап-байҡап тикшерә башлай.

- Телһеҙҙән телһеҙ тыуа инде, - тип иҫкә төшөрҙө шул аҡыл (әллә аҡылһыҙлыҡ). Бөттө көн. Килененең бала әйберҙәре тегеп маташҡанын күргән ҡәйнә лә һағайҙы, шик-шөбһәләрен әйтә башланы. Инде апаруҡ тынысланып килгән күрше-ҡулән, туған-тыумаса таяҡ тыҡҡан ҡырмыҫҡа иләүеләй гөж килде. Нәҫеле менән телһеҙ булған әллә кемдәрҙең әллә кемдәре иҫкә төштө...

Бильярд төртөүселәрҙең береһе, йәнәһе, хәленә кереп, әйтеп ҡуйҙы:

-Ҡайғырма юҡҡа, беҙҙең илдә телһеҙ ҙә кеше ул. Ана, Өфөлә туп-тулы улар. Үҙҙәренең заводы бар эшләргә, торлағы, магазины...

Ауыҙына һуғаһыңмы ни уның? Үҙенсә дуҫ күреп әйтә. Исмаһам, анау экстрасенс ла ярҙам итмәгән, аҡса йыйып, әҙәм алдап йөрөйҙәр шунда!

**(Дауамы. Башы 1-се һанда).**

КОНКУРС: "БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП..."

**2014 йылдың Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителеүе айҡанлы "Бер һүрәткә ҡарап" тигән конкурс иғлан итәбеҙ. Уның шарттарын 1-се һанда ҡарағыҙ. Конкурстың тәүге ҡатнашыусыһынан тәҡдим ителгән һүрәткә - танылған рәссам, Ш.Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" тигән эшенә аңлатма килеп тә етте. Уны иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

# УҒЫҢ БУШҠА АТМА,

## күңелең бушҡа һатма!

### (Эссе)



*Һис кенә лә ҡурыҡма һин*
*Дошмандарҙың күплегенән,*
*Ҡурыҡ уларҙың күмәкләшеп*
*Ҡыла торған этлегенән*
*(Әсхәл Әхмәт-Хужа)*

Интернет селтәрендә, кем ҡарағыһы килә, таба ала, бер видеосюжет күрһәтелә. Бер буш банкаға услап бөрсә һалалар. Ә икенсе банкалағы бөрсәләрҙең һауытын өҫтән быяла менән ҡаплап ҡуялар. Иң шәп һикереүсе йән эйәһе булараҡ, бер аҙҙан беренсе банкалағы бөтә бөрсәләр ҙә был үтә күренмәле зиндандан сығып ҡасып бөтә. Ә икенсе банкалағы бөрсәләр сығырға ынтылып, өҫтә ятҡан быялаға бәрелеп, бер аҙ өйрәнгәс, ҡапҡасты алып ташлайҙар. Тамашасылар ғәжәйеп бер күренешкә шаһит була: һикереп сығырға мөмкинлек табылһа ла, бер генә бөрсә лә банканан сығырға "уйламай"ҙа, шунда һәүетемсә генә йәшәүен дауам итә.

Был сюжетты рәссам Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" тигән картинаһын күргәс тә иҫкә төшөрҙөм. Ысынлап та, илебеҙ халҡы быуаттар буйына өҫтөнә үтә күренмәле быяла һалып ҡуйылған һауыт эсендә йәшәгән ошо йән эйәләрен хәтерләтә. Бәлки, был быяла хәҙер юҡтыр, әммә һаман да "ситлектән" сыға алмай яфаланабыҙ кеүек. Йыш ҡына телевизорҙан, радионан, матбуғат биттәренән ҡайһы бер "ил уҙамандарының" илебеҙ халҡы мәнфәғәтенә яуап бирмәгән ҡарарҙарҙы хуплаған сығыштарын күреп, ишетеп, уҡып, ер тишегенә инерҙәй булып ултырғаным бар. Ирекһеҙҙән, "Ағай, туҡта, шым!" тип ҡысҡырғы килә. Һинең абруйыңа ышанған кешеләрҙән оял, исмаһам. Юҡ, ул тутыйғош һымаҡ, йә үҙенән олораҡ түрәнең фекерен ҡабатлай, йә кеше ышандырырлыҡ дәлилдәр килтереп маташа. Нишләп һиңә дөрөҫөн әйтмәҫкә? Һинең бөтә нәмәң (пенсия, фатир, вазифа һ.б.) бар, эштән сығаралар тип ҡурҡырға түгел.

Криминологияла "10-10-80" тигән ҡағиҙә бар. Был ҡанунға ярашлы, кешеләрҙең 10 проценты йәмғиәттәге ҡоролоштоң ниндәй - социализм, капитализм - булыуына ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт урлашасаҡ. Уларҙы был ғәҙәттән хатта төрмә ҡурҡынысы ла тотоп тора ла, тәрбиәләй ҙә алмай. Уларға ҡаршы булып икенсе 10 процент кеше тора - улар һис бер ҡасан да урлашмаясаҡ, уғрылыҡ уларҙың эске мораль принциптары менән тап килмәй. Кешеләрҙең ҡалған 80 процентына килгәндә, ғалимдар фекеренсә, улар тотолмаҫына ныҡлы ышаныс булһа ғына урлашыуға барыуҙары мөмкин. Тимәк, йәмғиәттә булдырылған шарттар кешенең күпселеген теге йәки был юлға этәрә икән. Үкенескә күрә, Рәсәйҙә төҙөлгән баҙар иҡтисады был йәһәттән кешеләрҙең кире сифаттарын шаштырыуға йүнәлтелгән булып сыҡты. Урлашыу, ришүәт алыу, көнләшеү кеүек һыҙаттар матди байлыҡҡа өлгәшеү өсөн ғәҙәти күренешкә әйләнеп китте. Дөрөҫ, ғәҙел йәшәгән кеше бөгөн даланһыҙ тип ҡабул ителә. Төрлө конкурстарҙа еңеүҙе тейешле һәләт түгел, ә ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, аҡса хәл итә. Диссертацияны үҙең яҙыу урынына һатып алыу модаға инде. Ялған дипломдар һатып алып, карьера эшләүселәрҙең осоҡырыйы күренмәй. (Ул ғына ла түгел, дәүләт органдары кешене ошоноң кеүек формаль ҡағыҙҙар (грамота, хөрмәт хаты, цитата һ.б) йыйырға ҡуша. Шунын арҡаһында, кеше үҙенең эшен сифатлы итеп үтәйһе урынға, чиновниктар өсөн "яҡшы күрһәткестәр" туплау менән мәшғүл. Төрлө вазифаларҙы һатып алыу ҙа ғәҙәти күренеш итеп ҡабул ителә башланы.

Рәсәй етәкселеге баҙар иҡтисадының был кире яҡтарының дәүләттең киләсәге өсөн иң ҡурҡыныс булған факторы икәнен аңланы шикелле. Ниһәйәт, быйылғы 2014 йыл Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителде. Ысынлап та юғары мәҙәниәтле кеше һис ҡасан да был хилафлыҡтарға бармаясаҡ. Көсһөҙ диссертацияға ул ыңғай рецензия яҙмаясаҡ, һәләтһеҙ кешеләрҙе өҫкә күтәрергә юл ҡуймаясаҡ. Был йәһәттән бөгөн мәҙәниәт ысын кимәлдә көслө иҡтисади факторға әйләнә ала.

Ул ғына ла түгел, баяғы "быяла ҡапҡас" кешегә байтаҡ кире сифаттар тыуҙырырға булышлыҡ итә. Һәр милләттең 10 "йүнһеҙ" проценты асыҡтан-асыҡ үҙ халҡына ҡаршы тора. Был һәләтле ижадсыларҙы юҡҡа сығарыуға, уларға артабан үҫеш юлдарын ҡаплауға ҡоролған. Картиналағы уҡтарҙың күпселеге шундай ҡәрҙәштәребеҙ тарафынан атыла ла инде. Улар властарға төрлө ҡотҡо, ошаҡ, ифтира еткереп, замандаштарыбыҙҙы эштән сығарырға, төрмәләргә яптырырға тырыша. Яңыраҡ Өлкә Комитет секретарының ҡулы менән бер башҡорт ректорының башын ошолай итеп "ашағандары" тураһында ишетеп хайран ҡалдым. Золом ҡорбандарының күпселеге ошо юл менән аттырылған да инде. Башҡортостан юлдаш телеканалынан күрһәтелгән Торатауға ҡаршы акция авторҙары ла ошо лагерҙан түгелме ни? Нисек кенә булмаһын, был кешеләр һәр ваҡыт бар һәм буласаҡ. Бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, "Дошмандарыңдан ҡурҡма, улар, кәм тигәндә, һине үлтерер. Дуҫтарыңдан да ҡурҡма - улар, кәм тигәндә, һине һатып ебәрер. Битарафтарҙан ғына ҡурҡырға кәрәк - уларҙың шым ғына бирелгән ризалығынан ошо үлтерештәр һәм хаинлыҡтар атҡарыла ла инде".

*Һүҙем хаҡтыр,*
*әйткәнемә ышанығыҙ:*
*Көнсөл дуҫ ул -*
*иң ҡурҡыныс дошманығыҙ,*

тип юҡҡа ғына әйтмәгән шағир.

Ысынлап та, Йәлил Сөләймәновтың картинаһындағы уҡтарҙың күпселеге ошо битараф булған "80 процент" сафы эсендәге мөртәттәр тарафынан, хатта йәнен ҡыйыуға, ебәрелә лә инде. Уларҙың байтаҡтары үҙен башҡорт рухлы, ил уҙаманы тип иҫәпләй, был фекер уны уратып алған әпкәләйҙәре менән дә халыҡҡа еткерелә. Власть тарафынан да был "шәхестәр" күтәрелеп килә - тейешле орден-миҙалдар, премиялар, исемдәр ваҡытында бирелеп тора, уларға, үҙ сиратында, был "дәүләт саҙаҡаһын" өләшеү хоҡуғы ла бирелә. Теге йәки был өлкәлә ҡалҡып килгән һәләтле ижадсыларҙы батырыу, дөмөктөрөү уларҙың йәшәү маҡсатына әүерелә. Иң күп уҡтарҙы ошолар ата ла инде.

*Һиңә хыянат иткәнде*
*Дуҫ тип ҡабат яҡынайтма,-*
*Бер төкөргән төкөрөгөн*
*Һис кем дә яңынан ҡапмай.*

Ил халҡының "иң яҡшы 10 процентына" килгәндә, өмөт һүнмәй. Үҙҙәренә тоҫҡалған меңәрләгән уҡҡа ҡалған берҙән-бер уғын тотоп, йәнен аямай сығырға әҙер батырыбыҙҙы һүрәтләгән Йәлил Сөләймәновтың образы мине ошо юлдарҙы яҙырға этәрҙе лә инде. "Киске Өфө"нөң был башланғыһын ҡушҡуллап хуплайым. Һүҙ оҫталары шымып ҡалған сағында, бәлки, ҡәләм оҫталары ижадының тәьҫир көсө алға сығыуы кәрәктер.

*Һине артыҡ өркөтмәһен*
*Дошмандарҙың уҡмашыуы,*
*Дошмандарҙың ныҡлығы,*
*Ул уҡмашыу - йыландарҙың*
*Берен-бере ашар алдынан*
*Ваҡытлыса дуҫлығы.*

**Бәхтийәр ӘХӘТОВ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ҠАБАТЛАНА ТАРИХ, ҠАБАТЛАНА...

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА, шағирә, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаты:** Үтеп киткән 2013 йылда мине иң тетрәткән ваҡиға - ул да булһа, республикабыҙҙың бынан 20 йыл элек ҡабул ителеп, 2000, 2002, 2006 һәм 2012 йылдарҙа федераль закондарға яраҡлаштырыу һылтауы менән үҙгәртеп бөтөлгән Конституцияһына сираттағы төҙәтеү индерелеүе булды. 2014 йылдан башлап (гәрсә үҙәк был эште 2015 йылғаса тип билдәләһә лә) Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһы бүтән төрлө итеп атап йөрөтөләсәк, имеш. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары үҙҙәренең 26 декабрҙәге ултырышында тәүге уҡыуҙа уҡ был положениены хуплап та ҡуйҙы. Конституциябыҙға был төҙәтмәне индереү инициативаһы менән Башҡортостан Республикаһы Президенты ла, прокуратура ла, парламент та түгел, ә Башҡортостан Республикаһының Конституцион Суды рәйесе сығыш яһаны һәм үҙенең был аҙымын ул Конституциябыҙҙы федераль закондарға яраҡлаштырыу кәрәклеге менән аңлатты. Ә бит был федераль закондар үҙҙәре үк РФ Конституцияһының күп положениеларына, шулай уҡ БМО-ның барлыҡ илдәр өсөн дә ҡабул ителгән халыҡ-ара документтарына, декларацияларына, пакттарына ҡаршы килә. Миҫал өсөн Конституциябыҙҙан юғалған ҡайһы бер хоҡуҡтарыбыҙҙы ғына атап үткем килә. Әйтәйек, киң мәғлүмәт сараларында цензураны тыйыу принцибы, граждандарыбыҙҙың пикеттар, демонстрациялар, забастовкалар үткәреүгә булған хоҡуҡтарының айырым закондар менән сикләнеүе, суд ҡарарынан башҡа ғәйепләнеүсене ҡулға алмау, яуапҡа тарттырыусыға тән язаһы ҡулланыу, кешелек дәрәжәһен мыҫҡыллау һ.б. Ә инде РФ Конституцияһы ҡабул итеү көнөнә арналған Үҙәк телевидение тапшырыуҙарында, Федераль Конституцияны үҙгәртергә, хатта уның преамбулаһына "Рәсәй - православие дәүләте" тип яҙырға кәрәк, тигән саҡырыуҙар ҙа яңғыраны. В. Жириновскийҙың, Рәсәй унитар дәүләт булырға тейеш, тип тәкрарлауҙарын әйтеп тә тормайым. Федератив дәүләтебеҙҙе юғалта барыуыбыҙ тап ошондай империя сире менән ауырыусылар ҡулы аша ғәмәлгә ашырыла. Милли республикалар президенттары атамаһын алмаштырыу ҙа ошо сәйәсәт һөҙөмтәһе. Шуға күрә лә мин был аҙымды барыбер ҙә Конституцияға ҡаршы акт тип иҫәпләйем. Был шиғырым ошо хаҡта уйланыуҙарҙан һуң яҙылды:

### Ҡабатлана тарих, ҡабатлана...

*Таҙа һыуҙар тағы буръяҡлана,*
*Имен илдәр йәнә болғаҡлана.*
*Хоҡуҡтарҙы беҙҙең танымайҙар!*
*Ҡабатлана тарих, ҡабатлана.*

*Рәсәй менән булған килешеүҙәр*
*Нисәнсе ҡат инде тураҡлана!*
*Яуыз көстәр йәнә ҡанатлана -*
*Ҡабатлана тарих, ҡабатлана.*

*"Бүленмәҫ һәм берҙәм" илебеҙҙә*
*Иҫке таҡмаҡ йәнә һамаҡлана.*
*Ерем, телем, динем талаҡлана!*
*Ҡабатлана тарих, ҡабатлана.*

*Азатлыҡтың хаҡы ҡыйбатлана,*
*Заманына күрә яраҡлана,*
*Бүтән исем менән атаҡлана -*
*Ҡабатлана тарих, ҡабатлана.*

*Золом йылдарымы һыҙатлана?*
*Ирек китә, беҙҙән йыраҡлана.*
*Сикәләрҙә йәштәр юлаҡлана:*
*Ҡабатлана тарих, ҡабатлана...*

✓ *Аҙ хәрәкәтләнеү төрлө сирҙәр сығанағы булып тора. Медицина тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, ултырып эшләүселәрҙең бөйөрөндә таштар барлыҡҡа килә икән. Әүҙем кешеләр был сир менән һирәгерәк ауырый.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЙРАМ ТАБЫНЫНДА...

## анар һуты булһын

■ Байрамдар мәлендә артыҡ күп итеп һәм төнгә ҡарай ашау организмға өҫтәмә ауырлыҡтар тыуҙыра. Диетологтар хатта был осорҙо байрам стресы тип атай һәм уны булдырмау өсөн анар емеше ашарға кәңәш итә. Анарҙа антиоксиданттар күп. Ғалимдар белдереүенсә, анар һуты ҡандағы шәкәр һәм холестерин күләмен нормала тота, йөрәк өйәнәге һәм инсульттан һаҡлай, гипертониянан дауаланырға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, анар һуты яман шеш күҙәнәктәре үҫешен туҡтата, анар яратыусыларҙың яралары тиҙерәк бөтәшә. Эдинбургтағы (Шотландия) Королева Маргарет университеты ғалимдары асыҡлауынса, 500 мл анар һутында фолий кислотаһының тәүлек нормаһы бар, ә был кислота етешмәүе депрессияға алып килеүе ихтимал.

■ Дөрөҫ туҡланмау артыҡ ауырлыҡ булдырып ҡына ҡалмай, баш мейеһенең когнитив функцияларын да насарайта. Хайуандарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, май һәм шәкәргә бай ризыҡтар менән туҡланыу бер аҙна эсендә хәтерҙе насарайта. Етмәһә, был осраҡта баш мейеһендә кире тергеҙеп булмаған процестар башлана, дөрөҫ туҡланыуға күсеп тә, был функцияларҙы кире тергеҙеп булмай, ти ғалимдар.

■ Аҙ хәрәкәтләнеү төрлө сирҙәр сығанағы булып тора. Медицина тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, ултырып эшләүселәрҙең бөйөрөндә таштар барлыҡҡа килә икән. 84 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, әүҙем кешеләр был сир менән һирәгерәк ауырый. Әгәр ҙә кеше аҙнаһына 1 сәғәт йүгерһә, 3 сәғәт йәйәү йөрөһә, йәиһә 4 сәғәт баҡсала эшләһә, әүҙем тормош алып бара, тип иҫәпләнә. Ултырып эшләү умыртҡа бағанаһына ла зыян итә. Бынан тыш, метаболизм насарая, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары хәүефе барлыҡҡа килә.

■ Ньюкасл университеты (Австралия) табиптары шәкәрҙең тәүлек нормаһын билдәләгән. 1990 йылда Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы шәкәрҙең нормаһын түбәндәгесә билдәләгәйне: ир-егеттәр өсөн - 70, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 50 грамм. Белгестәр иҫәпләүенсә, был күләм бик ҙур. Көнөнә 5 балғалаҡ, йәиһә 30 грамм шәкәр етә, ти улар. Шәкәр ҡулланыуҙы кәметеү йөрәк сәләмәтлеген яҡшыртып ҡына ҡалмай, диабеттан, теш ауырыуҙарынан һаҡлай. Норманы иҫәпләгәндә унын төрлө ризыҡтар составында булған күләмен дә иҫәпкә алырға кәрәк.

■ Сәс ағарыуы - организмдың ҡартайыуы тураһында һөйләмәй, тип белдерә Америка ғалимдары. Баҡтиһәң, сал сәстәр барлыҡҡа килеүе ныҡлы сәләмәтлек билдәһе икән. Бер үк йәштәге кешеләрҙең сәстәре бер тигеҙ салланмай. Ғалимдар ошо күренешкә иғтибар итеп, был мәсьәләне төптәнерәк тикшерергә булған. Тестар күрһәтеүенсә, әгәр ҙә организм өйрәнгән режимында эшләй һәм бер ниндәй тайпылыштар юҡ икән, сәстәр 50-55 йәшкә саллана. Тимәк, кешенең сәстәре ошо йәштә ағарһа, был унын сәләмәт булыуы тураһында һөйләй. Ә сал сәстәрҙең барлыҡҡа килеүе кеше организмында глутатион күбәйеүе тураһында белдерә, йәғни, организм ҡартайырға теләмәй һәм был процестарҙы туҡтатыу маҡсатында эшләй башлай.

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ

# ҺЫНАУҘАР...

## еңеүҙәр өсөн ойотҡо

### Оләсәйҙәр дауаханаһы

Һалҡын алдырған саҡтар булып ҡына торҙо. Медпункт та бар ауылда. Тик сөскөргән һайын дарыу тип йүгерттермәне оләсәйҙәр. Сеүәтәгә ҡайнар һыу менән ҡорот иҙеп, һары май һалып һемерттерә инеләр. Әсәйҙәр бәпәйләнеме, күрше-тирә, туғандарҙан һурпанан башлап тәмле-тәмле ризыҡтар килә башлай. Баҡса емешеме, урмандыҡымы, балмы, барыһы менән дә бүлешәләр. Оләсәйем "Яңы ауырыу, яңы аш - зәңгәрә минән ҡас", тип, иң беренсе ауыҙ итер ине. Зәңгәрә заманса әйткәндә цинга була инде.

Оләсәйҙәр мәктәбенән ҡалған белемдәр әле лә беҙгә хеҙмәт итә:

● Өләсәйебеҙ, аяҡ яна, тип зарлана башлаһа, баҡса ситтәренән ҡан үләне (мокрица) килтереп бирәбеҙ. Ул үләнде ашаған себештәр ҙә ныҡ була, синекмәй үҫәләр...

● Дегәнәк тамыры быуынды нығыта. Уны ашаған мал йылтырап тора...

● Көсһөҙләнһәң, мөсһөҙләнһәң, миктәһәң, өҙләкһәң - алтын тамыр үҙебеҙҙә. Был бәғәнәш, йәғни Воронец колосовидный. Тыш яғынан нәк женьшенға оҡшап тора. Ике төрҙә ул: ҡара емешле һәм ҡыҙыл емешле.

● Күгүлән - йөҙ сиргә дауа. Уны ҡош-ҡорт, себештәр, турғайҙар түшәлеп ятып ашай...

● Ҡыштарын сирҙәрҙән ҡурсалап, йоҡа ғына киҫем айыу майы ашатырҙар ине.

● Яраларҙы ҡаҙ, һарыҡ майы менән менән һылап дауаланылар.

● Йүкә балы менән сәй үҙе бер шифа, күпме сирҙән кәртә улар.

● Май айынындағы һыйыр майын дауаға ғына тоттолар. Ул май төҫкә һарыраҡ була.

● Сөйҙә мәтрүш, һары мәтрүш, йүкә бәйләмдәре, артыш һәр саҡ эленеп торҙо.

**Беҙ йыуа, оҫҡон, ҡаҡы, кәзә һаҡалы, ҡуҙғалаҡ, көпшә, ҡымыҙлыҡ, балтырған, төймәсек, киндер һәм алабута орлоғо, ҡуян тубыҡ, еләк, муйыл, ағас еләге, бөрлөгән, балан ашап, урындыҡта кейеҙҙә йоҡлап үҫкән ялан тәпәйле балалар. Шуға ла бала саҡта дауахана түшәгендә ятыусылар булманы ла тиерлек.**

### Сирҙәр - цивилизация тигән "сибәрбикә" бүләктәре...

Медицина фәне иҫ китмәле ҡаҙаныштары, заманса ҡорамалдары, көслө дарыуҙары менән күптән сир тигәндең үҙен ерләргә тейеш ине. Әммә дауаханалар лыҡа тулы. Сирләләр сират тора...

Хәҙерге йәшәү рәүеше физик хеҙмәт нисбәтен ҡырҡа кәметте. Шул уҡ ваҡытта нервылар көсөргәнеше талап ителгән эш төрҙәре күбәйҙе. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы билдәләүенсә, кеше һаулығының 7-8 проценты ғына медицинаға, ә 40 проценты мөхит факторҙарына, сифатһыҙ аҙыҡҡа, 50 процентынан ашыуы кешенең йәшәү рәүешенә бәйле. Күптәр, сәләмәт йәшәү рәүеше, тигәндә, тәмәке тартмау һәм араҡы эсмәүҙе генә күҙ алдына килтерә. Нисек кенә булмаһын, һәр кем үҙенең һаулығы өсөн табиптар яуаплы тип уйлай.

Дауаханалар сирле кешене күпмелер дәрәжәлә ремонтлай ғына. Дауалап, үлемдән һаҡлап ҡалырға тырыша. Әммә әллә күпме көс һалып һауыҡтырылған кеше бер аҙҙан тағы сирләй башлай, сөнки ул һаулығын һаҡлау өсөн үҙе бер нәмә лә эшләмәй.

Сәләмәт йәшәү рәүеше бик күп факторҙарҙы үҙ эсенә ала. Үҙ-үҙеңә, үҙеңде уратып алған бөтә даирәгә мөнәсәбәтең, туҡланыуың, көнкүрешең, ҡылған эштәрең - уға барыһы ла инә. Хатта һүгенеү ҙә иң тәүҙә үҙеңдең һәм нәҫелеңдең аураһын, энергетикаһын, үҙебеҙсә әйткәндә, тәҡдирен емерә. Ҡарғаныу, йыуынты һыуҙы, көлдө кеше юлына һибеү ҙә, теләһә ҡайҙа сүп-сар түгеү, тәбиғәтте талау, хайуандарҙы рәнйетеү - былар ҙа үҙеңә әйләнеп килә торған бумеранг. Хәҡиҡәт юлы - ауыр юл. Тайпылдыңмы, тимәк, үҙеңде хөрмәт итмәйһең. Һаулығың тураһында ҡайғыртмау нигеҙендә шул ята.



Үҙ һаулығын һаҡламаған, һанламағандар башҡаларға ла шундай мөнәсәбәттә.

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы. Башы 50-52-се һандарҙа).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ХӘРӘКӘТ...

## сәләмәтлек сығанағы

**Көтөп алған байрамдар үтеп тә китте. Яңы көс менән хеҙмәт аҙнаһын башлап ебәреү мәле етһә лә, күптәр оҙайлы ялдарҙан һуң һаман үҙен насар тоялыр әле. Йоҡонан уянып булмай, организм бар көстө ашҡаҙандағы аҙыҡты эшкәртеүгә тотонғанлыҡтан, хәл дә юҡ, ауырлыҡ та бер аҙ артып киткән. Түбәндәге кәңәштәр организмды тиҙ арала тергеҙергә ярҙам итер.**



● Иң тәүҙә таҙа һыу эсә башлау кәрәк. Белгестәр көнөнә 2,5 литр һыу эсеү бер көнгә етерлек энергия бирә, ти. Балалар өсөн был норманың яртыһы ла етә.

● Үлән сәйҙәре бигерәк файҙалы, бөтнөк, имбирь, аҡ сәскә сәйенә лимон ҡушырға була.

● Сәй эскәндән һуң организмдың эшкә һәләтлеге юғалып тора, шуға ла эш ваҡытында сәй эсеү менән мауығыу дөрөҫ түгел. Ә бына ял иткәндә күңел күтәренкелеге өсөн сәйҙең зыяны булмаҫ. Шәкәр урынына бал һалынған сәйгә бысаҡ осонда ғына ҡыҙыл әсе борос йәки мускат сәтләүеге оно өҫтәгеҙ. Был ҡырҡыу тәмләткестәрҙәге капсаицин матдәләр алышыныуына һәм йөрәк-ҡан системаһы эшмәкәрлегенә ярҙам итә, кәйефте бермә-бер күтәрә.

● Тәм-том организм өсөн зыянлы, бигерәк тә мул байрам табынынан һуң.

● Калориялары түбән булыу сәбәпле, йәшелсәләр файҙалы буласаҡ, улар аш һеңдереүгә лә булышлыҡ итә. Тик салат эшләйһегеҙ икән, бер-ике йәшелсәнән торған ябай салаттарға күсегеҙ.

● Ананас, грейпфрут матдәләр алышыныуҙы яҡшырта. Уларҙы башҡа ризыҡтар алдынан ашау дөрөҫ булыр.

● Артыҡ ауырлыҡтан әүҙем ял ғына ҡотҡара аласаҡ. Етмәһә, был һеҙгә әллә күпме ыңғай тойғолар бүләк итәсәк.

● Артыҡ килограмдарҙан ҡотолорға әфлисун ярҙам итәсәк. Ул кальций, калий, марганец, фосфор, тимер, баҡыр һәм цинкка, С, В1, А витаминдарына, фолий кислотаһына бай, организмдан токсиндарҙы сығара, иммунитетты күтәрә. Ябығырға теләүселәргә ябай кәңәш: аҙнаһына бер тапҡыр иртәнге, төшкө һәм киске ашҡа әфлисун ғына ҡулланығыҙ.

● Нисек кенә асыҡһағыҙ ҙа, урамда ашауҙан тыйылығыҙ. Сөнки ул ваҡытта беҙ йә майлы, йә татлы һәм юғары калориялы ризыҡтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Ә бына емеш-еләк ҡапҡылап алыу өсөн бик ярап ҡала. Хатта бер нисә банандың файҙаһы бәләкәй киҫәк шоколадҡа ҡарағанда күберәк.

● Уяныу менән кирелегеҙ. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр һәлмәк хәрәкәттәр кәйефте күтәреүен, матдәләр алышыныуын яҡшыртыуын, энергия биреүен, мускулдарҙы нығытыуын, быуындар һығылмалылығын ҡайтарыуға булышлыҡ итеүен асыҡлаған. Иртән уяныу менән көҙгө алдына баҫығыҙ һәм ҡулдарығыҙҙы өҫкә күтәрегеҙ. Уң ҡулығыҙ менән һул терһәгегеҙҙе тотоғоҙ һәм бөтә кәүҙәгеҙ менән мускулдарҙың еңелсә тартылыуын һиҙгәнсе уңға бороло ғоҙ. Ҡулдарҙы алыштырып, ошо уҡ хәрәкәтте икенсе яҡҡа ҡабатлағыҙ. Яйлап ҡына алға эйелеп, ҡулдарҙы аҫҡа төшөрөгөҙ. Эс мускулдарын эскә тартығыҙ. Ҡалаҡ һөйәктәрен бер-береһенә яҡынайтырға тырышып, яйлап ҡына артҡа эйелегеҙ. Тәрән тын алып, үҙегеҙҙе ҡосаҡлағыҙ. Тынды ауыҙ аша сығарған саҡта ҡулдарығыҙҙы осорға йыйынған кеүек итеп ҡуйығыҙ. Күнегеүҙе 3-4 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Был күнегеү арҡа мускулдарын нығытасаҡ һәм һеҙҙе эш көнөнә көйләйәсәк.

✓ *Үҙеңде рәнйетеүсене рәнйетмә, һинең тураңда ғәйбәт һөйләһәләр, һин һөйләмә, ә "Һин минең турала ғәйбәт һөйләп, түбәнселеккә төштөң, мин ғәйбәт һөйләп, түбәнселеккә төшмәм. Сөнки мин ғәйбәттәрҙән юғары", тип әйт.*



*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

**Ҡиәмәт көнөндә мөъминдәр йыйыласаҡ та, Аллаһы Тәғәлә алдында уларға шәфәғәт бирәсәк кешене эҙләй башлаясаҡ. Улар иң тәүҙә бәйғәмбәребеҙ Әҙәм ғәләйһис сәлләмгә киләсәк, унының шәфәғәтен һораясаҡ. Ләкин үҙенең йәннәттән сығарылыуына сәбәп булған хатаһын хәтергә төшөрөп, Әҙәм: "Мин һеҙгә шәфәғәт бирә алыр кеше түгелмен", - тип яуап бирәсәк. Ул кешеләрҙе Нухҡа ебәрәсәк. Нух уларҙы - Ибраһимға, Ибраһим - Мусаға, Муса Ғайсаға йүнәлтәсәк. Бөтә бәйғәмбәрҙәр ҙә шәфәғәт итеү кеүек яуаплы вазифанан ситләшәсәк. Сират Мөхәммәт бәйғәмбәргә етәсәк. Нәби һәм рәсүлдәрҙең һәр береһенә бирелгән төп доғаһын улар үҙҙәре өсөн был донъяла ҡулланһа, Мөхәммәт бәйғәмбәр был доғаны Ҡиәмәт көнөнәсә, өммәте хаҡына һаҡлап ҡаласаҡ. Ул доға - өммәте өсөн шәфәғәт һорау ул. Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт бәйғәмбәргә бик күп мөъминдәр өсөн шәфәғәт һорарға рөхсәт итәсәк һәм бик күп кешеләр ошо арҡала йәһәннәм утынан һаҡланып ҡаласаҡ...**

# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ...



## беҙҙең өсөн шәфәғәт һорар

Ун дүрт быуаттан ашыу иблис ҡотҡоһона бирелеүселәрҙең көслө баҫымы аҫтында Уға ҡарата бик күп хәйләләр эшләнеүгә, яла яғылыуға, көслө тәнҡиткә дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, был Шәхес бөгөн дә миллиардлаған кешенең абруйлы остазы, хөрмәт иткән кешеһе булып ҡала. Заман геройҙарын, кумирҙарын маҡтауға миллиардлаған долларҙар сарыф ителгәндә бары тик Унының исеме генә көнөнә миллиардлаған тапҡыр ҡабатлана. Ер шарының миллионлаған нөктәһендә Унының Аллаһы Тәғәләнең Рәсүле булыуы хаҡында көнөнә бер нисә тапҡыр аҙан-икәмәттәрҙә геүәһлек ителә. Ул - Аллаһы Тәғәләнең кешелеккә ебәрелгән һуңғы рәсүле, ул - Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм!

Унының әхлағын, кешелеклек сифаттарын, ойоштороу һәләтен бары һуҡыр ғына күрмәҫ, аңра ғына ҡабул итмәҫ. 23 йыл эсендә ҡыҙҙарын терелəй ергә күмгән, аҙғынлыҡҡа батҡан милләтте кешеләргә генә түгел, ерҙәге бәләкәй бөжәктәргә лә инсафлы ҡарай башлаған юғары мәҙәниәтле милләт итеп тәрбиәләгән тағы берәй кеше бармы? Һәр ырыу, ара дошманлашып йәшәгән милләтте берләштереп, уны киләһе бер нисә быуатҡа донъяның иң көслө ҡәүеменә әйләндергән; наҙан халыҡтан бөтөн хәҙерге ғилемгә нигеҙ һалыусыларҙы тәбиәләгән башҡа остаз бармы? Ун дүрт быуат дауамында ул иман төмен татыған төрлө милләт вәкилдәренә алыштырғыһыҙ өлгө булды.

Беҙҙең милләткә лә ят түгел Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең исеме, беҙҙең милләткә лә ят түгел ислам, беҙҙең милләткә лә ят түгел дин хаҡына фиҙаҡәрлек. Мәҫәлән, башҡорт донъяһында меңдәрсә кешегә бәхет юлы күрһәткән Зәйнулла Рәсүлев һәм унының мөриттәре Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең нуры менән илһамланған. Һуңынан, Зәйнулла һәм Ғабдрахман Рәсүлевтар, Ризаитдин Фәхретдин кеүек фиҙаҡәр остаздарҙың уҡыусылары динде иҙгән атеизм режимында ла баҙ аҫтарында, зыяраттарҙа йәшенеп булһа ла, ғибәҙәттәрен үтәп, имандарын һаҡлап алып ҡалған. Шул кешеләр рухи тамырҙарҙы өҙмәйенсә, беҙҙең заманға килтереп еткермәгәнме? Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең нәсихәттәрен күңеле менән ҡабул иткән Аҡмулла кеүек инсандар ғилем хаҡына бар ғүмерҙәрен юлда үткәреп мөғәллимлек итмәгәнме? Халҡы өсөн күкрәктәрен утҡа ҡаршы ҡуйған батырҙарыбыҙҙың, ихтилал башлыҡтарыбыҙҙың күңелендә иман булмағанмы? Хәллерәктәр дин хаҡына байлыҡтарын фиҙа ҡылмағанмы?

Аллаһ берәү, хәҡиҡәт тә берәү. Ҡиәмәт хаҡ, йәннәт, йәһәннәм дә хаҡ. Мөхәммәт бәйғәмбәр еткергән Аллаһ ҡанундарының да һәр береһе хаҡ. Ике донъя бәхетенән ҡолаҡ ҡаҡмайым тиһәң, Ҡөрьән һәм Аллаһ Илсеһенең сөннәтенән (юлынан) ситкә аяҡ баҫмайынса атлау кәрәк. Ғибәҙәткә Аллаһы Тәғәлә генә лайыҡлы. Беҙҙең намаҙҙарыбыҙ һәм ураҙаларыбыҙ, зәкәттәребеҙ һәм хаждарыбыҙ - барлыҡ изге ғәмәлдәребеҙ Аллаһы Тәғәлә хаҡына. Мөхәммәт бәйғәмбәр иһә Аллаһы Тәғәләне Раббыһы итеп таныған иң камил инсан. Мөхәммәт бәйғәмбәр, Раббыбыҙҙың ҡолдарына тәғәйенләнгән йәшәйеш ҡағиҙәләрен түкмәй-сәсмәй еткереп, ошо нәсихәттәргә ҡолаҡ һалыусыларға оло әжер, ҡолаҡ һалмағандарға, инҡар иткәндәргә мәңгелек ғазаптар вәғәҙә иткән һуңғы Аллаһ Рәсүле. Бәйғәмбәр күрһәткән юлдан барһаҡ, иншаллаһ, Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе беҙҙең өсөн шәфәғәт һорар, беҙ бәхет ҡаҙанғандар исемлегендә булырбыҙ.

Мин-минлек йәки эгоизм осоро тиҙәр бөгөнгө заманды. Һәр кем үҙ алдына йәшәй, башҡаларҙа эше юҡ. "Мәҙәнилек" юғары - әхлаҡ түбән. Бала ата-әсәһен танымай, ата-әсә балаһын "урамға" тәрбиәгә бирә. Күпме кеше үҙен мосолман ти, ә Аллаһы Тәғәлә, Мөхәммәт бәйғәмбәр хаҡында бер ни белмәй. Ҡөрьән һүҙенә ҡолаҡ һалмай, Ҡиәмәт көнөндә яуап тотасағы тураһында уйлап та бирмәй, был донъялағы ғүмере һанаулы икәнен онотorға тырыша. Фани рәхәтлектәрҙе өҫтөн күрә, ә мәңгелек рәхәтлектәргә табан бер аҙым булһа ла эшләргә йыбана. Ошондай замандарҙа мәүлиттәр үткәреү, күп мосолман халыҡтарына хас булған изге йоланы атҡарыу бик яҡшы эш булыр ине. Ҡөрьән уҡылған, зекер, салауаттар әйтелгән, Аллаһы Тәғәлә, Мөхәммәт бәйғәмбәр, Ҡиәмәт көнө хаҡында иҫкә төшөрөлгән мәжлестәргә туғандарҙы, яҡындарҙы, күрше-күләнде, таныштарҙы саҡырып, был эште таҙа, изге ниәт менән башҡарып, Аллаһ ризалығын алмаҫмы кеше? Бәлки, ошондай мәжлестәргә саҡырылған, әлегә диндән йырағыраҡ йөрөгән берәүҙең күңеленә Аллаһы Тәғәлә иман нурын һалыр. Бәлки, ошо үҙебеҙҙең ҡотҡарылыуыбыҙҙың сәбәбе булыр, иншаллаһ.

**Әйткәндәй, 13 ғинуар - Мәүлит кисе.**

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҒӘЙБӘТ ҺӨЙЛӘҮСЕ...

## түбәнгә тәгәрәүселер

**Әлхәмдүлиллаһ, һуңғы йылдарҙа Аллаһы Тәғәләне иҫкә алыу, Ҡөрьән аяттары уҡыу мәжлестәре артты. Халҡыбыҙға иман нуры, ҡот килә, тип күңел шатлана. Әммә ләкин ҡайһы бер дини мәжлестәрҙә аят-сүрә уҡыу тамамланғас, кемдеңдер еңел генә итеп ғәйбәткә күсеп киткәнен аңғармай ҙа ҡалаһың. Үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, уға башҡалар ҙа ҡушылып китә: кемдең малы тәләфләнгән, кем һәләкәткә осраған, кемдең балаһы эсеп йөрөгән һ.б. Былдай мәжлестән тиҙерәк сығып китке килә. Уҡыған аят-доғаларың өсөн дә үкенеп ҡуяһың.**

Мосолман өсөн ғәйбәт һөйләү оло гонаһ һанала. Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай тигән: "Ғәйбәт - ул ҡәрҙәшең тураһында уға оҡшамаҫлыҡ итеп зекер итеүең. Әгәр һин әйтә торған етешһеҙлек унда булһа, тимәк, һин унының тураһында ғәйбәт һөйләнең; әгәр унда ул етешһеҙлек булмаһа, тимәк, һин уға яла яҡтың". "Кем Аллаһҡа һәм Ҡиәмәт көнөнә иман килтерә, хәйерлене һөйләһен, йә иһә өндәшмәһен. Ысынында, Аллаһ ҡоло Аллаһы Тәғәлә теләгән һүҙҙәрҙе әйтә ала, бының өсөн Раббыһы уны күп дәрәжәләргә күтәрер. Һәм, ысынында, Аллаһ ҡоло Аллаһы Тәғәләнең асыуын килтерерҙәй һүҙҙәрҙе лә әйтә ала, ләкин шул арҡаһла ул йәһәннәмгә ырғытылыр". Шулай уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр: "Һәр мосолман өсөн башҡа мосолмандың ғүмере, намыҫы һәм малы ҡағылһығыҙ булырға тейеш", - ти.

Риүәйәттә әйтелгәнсә, Суфиян бин Ғабдуллаһ исемле сәхәбә Бәйғәмбәрҙән: "Әй, Аллаһтың илсеһе, минең өсөн һин барыһынан да күберәк нимәнән ҡурҡаһың?" - тип һорай. Бәйғәмбәребеҙ телен сығарып күрһәтеп: "Ошонан", - ти.

Халҡыбыҙҙың "Илатҡан да тел, көлдөргән дә тел" тигән әйтеме бар. Әлбиттә, һәр кемдең нахаҡ һүҙ ишетеүҙән күңеле рәнйегән саҡтары була. Шул ваҡытта күңелең кисерештәрен кемдәргәлер һөйләп, үҙеңде йыуатҡың да килә. Ләкин һәр ваҡыт Ҡөҙрәтле Аллаһы Тәғәләнең беҙҙең янылыбыҙҙа ғына икәнен һәм Ул бар нәмәне күреүсе, ишетеүсе, белеүсе икәнен иҫтә тоторға кәрәк! Үҙеңде рәнйетеүсене рәнйетмә, һинең тураңда ғәйбәт һөйләһәләр, һин һөйләмә, ә "Һин минең турала ғәйбәт һөйләп, түбәнселеккә төштөң, мин һинең турала ғәйбәт һөйләп, түбәнселеккә төшмәм. Сөнки мин ғәйбәттәрҙән юғары, мин Аллаһтан ҡурҡам", тип әйт. Ул кеше лә һиңә зыян итеүҙән туҡтар һәм үҙең дә Аллаһ һәм намыҫың алдында таҙа ҡалырһың.

Гонаһтарҙан бөтөнләй таҙарынып бөтөү тик әүлиәләр өсөн хас сифаттыр. Әммә беҙгә гонаһтарыбыҙ өсөн тәүбәгә килеп, истиғфар итеп тороу фарыз эштер. Аллаһ бит ғәфү итеүсе, рәхимле!

**Зәлифә ШАКИРОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерме етенсе көн.

**1-се бүлек: аҡыл. Өндәшмәү мөғжизәһе**

Беҙ бик ынтылышлы заманда йәшәйбеҙ. Былдай ҡатмарлы шарттарҙа дауыл алдынан тыныслыҡ һаҡлап ҡына именлектә йәшәрһегеҙ. Шәхси камиллыҡҡа өлгәшеү өсөн үҙеңде эске тыныслыҡҡа күнектереү мөһим әһәмиәткә эйә. Бөгөн иртәнсәк өнһөҙлөк һәм тынлыҡтың ҡеүәтен баһалап ҡарағыҙ. Тынлыҡ иң ярһыған аҡылға ла шифа бирә һәм уны тынысландыра. Иртәнге сәғәттәрегеҙҙә өйөгөҙҙәге иң тыныс урында үткәреү өсөн ярты сәғәт табығыҙ. Бөтөн иғтибарығыҙҙы тынлыҡҡа йүнәлтегеҙ һәм шунан ҡәнәғәтлек алығыҙ. Дөрөҫ, бер нисә минуттан уҡ һеҙҙә һикереп тороп, ашығыс эштәрегеҙгә тотонорға теләк тыуасаҡ, ләкин һеҙ ошоға тиклем үҙләштергән үҙ-үҙеңә контроль ысулдарын һәм бөтә сараларын ҡулланып, был теләкте баҫа алаһығыҙ. Тын ғына, өндәшмәй ултырығыҙ. Йөрәгегеҙ тибешенә ҡолаҡ һалығыҙ йәки башығыҙ ауырлығын тойорға тырышығыҙ. Ошолай ултырған хәлдә һеҙ элек иғтибарға алмаған нәмәләрҙе күрә башларһығыҙ.

**Икенсе бүлек: тән**

Күнекмәләрҙе ләззәткә әүерелдерегеҙ. АҠШ Президенты Рональд Рейган бер саҡ уңыш асҡысының күнекмәләрҙә булыуы хаҡында матур кәңәш биргәйне: "Үҙегеҙгә оҡшаған күнегеү табығыҙ ҙа, шуны төрлө варианттарҙа ҡабатлағыҙ". "Мега тормош" программаһын башҡарғанда бынан алдағы 26 көн буйына физик күнегеүҙәр башҡарғайнығыҙ инде. Һеҙ үҙегеҙҙең күнеккәнлек һәм энергетик кимәлегеҙҙе юғарыраҡ билдәгә күтәргәйнегеҙ инде һәм тормошоғоҙҙоң бөтөн өлкәләрендә һиҙелерлек үҙгәрештәр күрҙегеҙ. Күңелегеҙҙе һағыш һәм күңелһеҙлек биләп алыуына юл ҡуймағыҙ. Физик күнекмәләрегеҙ программаһын төрләндерегеҙ.

**3-сө бүлек: характер**

Тормош буйынса яңы кәңәштәр:

а) шәхси йәки эш проблемаларығыҙ хаҡында бер ваҡытта ла транспортта һөйләшмәгеҙ. Эргәгеҙҙә кем килгәнен байҡамаған булһағыҙ, бының һөҙөмтәһенә үҙегеҙ ҙә аптырашта ҡалырһығыҙ.

б) Ҡатынығыҙ (ирегеҙ) менән бергә үткәреү өсөн аҙнаһына бер сәғәт булһа ла бүлегеҙ. Телевизорығыҙҙы һүндерегеҙ һәм иғтибарығыҙҙы йәмәғәтегеҙгә йүнәлтегеҙ.

в) яңы идеяларығыҙ менән тәжрибә үткәрегеҙ. Эш ваҡытығыҙҙы ойоштороуҙа электрон көндәлек йә башҡа компьютер саралары булдырып ҡарағыҙ.

г) перспективағыҙҙы күҙҙән яҙҙырмағыҙ. Эштәр һеҙгә тойолғандан да насар булыуы мөмкин түгел. Иң алама мәлдәр ҙә үтеп китә. Яңы ҡаршылыҡтарҙың килеп тыуыуы үҫеш һәм мөмкинлектәр файҙаһына ғына ул.

д) үҙегеҙгә дошмандар булдырмағыҙ.

е) был донъяла атайығыҙ йә әсәйегеҙ булмаауын бер мәлгә генә күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ, үҙегеҙҙе нисек тойорһоғоҙ икән? Уларға ниндәй һүҙҙәр әйтергә онотторғоҙ һәм иғтибарығыҙҙы бүлеп еткерәһегеҙме икән? Хәҙер үк телефонығыҙҙы алығыҙ ҙа яратҡан кешеләрегеҙгә әйтергә тейешле һүҙҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 13 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Брак по завещанию. Танцы на углях". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.25 "Две звезды".Новогодний выпуск
02.20, 03.05 "Мы не женаты". Комедия (12+).
03.00 Новости.
04.05 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Муза и генерал. Секретный роман Эйтингона". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.30, 14.50 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Воровская кровь". 1-я серия. Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30, 19.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Пока станица спит". Сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Петля времени". "Проклятие рода Гардениных". Детективный сериал. 1-я серия (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Аншлаг. Старый Новый год"
00.45 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
01.50 "Вход в лабиринт". 1-я серия. Детектив.
03.15 "Закон и порядок-18" (16+).
04.15 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.10 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.10 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
13.00 "Ер менән күк араһында". Фильм-концерт (12+)
14.15 "Таныш түгел таныштар" (1 бүлек) (6+)
